✓ *Күптәргә хас был ҡылыҡ дөрөҫ түгел: улар үҙҙәрендә булмаған сифаттарға эйә дуҫтар эҙләй һәм дуҫтарынан үҙҙәре бирә алмағанды талап итә..*

*(Цицерон).*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

1 - 7 ИЮНЬ (ҺӨТАЙ) 2013 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№22 (544)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Булыр бала бишектән**



3

**Маҡсат билдәле:** етемдәрһеҙ ҡала!



4

**Бәхетле булыр өсөн...**



8-9 күп тә кәрәкмәй икән шул

**Мосолман йәштәре...** хаҡ юлда йөрөһөн, тип



12

14 ТВ-программа


*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## Балалар - киләсәгебеҙ, тип ҡабатларға яратабыҙ. Ана шул киләсәк ышаныслы, сәләмәт һәм хәүефһеҙ булһын өсөн беҙгә ниҙәр эшләргә? Балаларҙы нимәнән һәм нисек һаҡларға?



***Нурия ШАҺИМОРАТОВА, Белорет районы Арыҫлан Мөбәрәков исемендәге Сермән балалар йорто директоры:*** Һуңғы ваҡыт илебеҙ етәкселеге тарафынан балалар хоҡуҡтарын яҡлау, социаль тәьминәт, тәрбиә мәсьәләләренә иғтибар көсәйтелде. Был үҙ сиратында балалар учреждениелары, айырыуса етем һәм ата-әсә ҡарауынан мәхрүм балалар менән эшләүсе коллективтар алдына етди талаптар һәм бурыстар ҡуя, сөнки ғаилә ҡурсыуынан мәхрүм, ата-әсә наҙының ни икәнен дә белмәгән кескәйҙәр икеләтә яҡлауға, ярҙамға мохтаж. Әйткәндәй, беҙгә эшләүе бер ҡасан да еңел булманы, ауырлыҡтар ҡурҡытмай, тик йәмғиәтебеҙҙә ата-әсәле "тере етемдәр"ҙең арта барыуы күңелгә ауыр. Әлеге ваҡытта беҙҙең балалар йортонда урын юҡ. Ауырыу балалар күп килә, бер генә сәләмәт бала ла юҡ, шуға күрә беҙ тәү сиратта уларҙың һаулығын нығытыуҙы маҡсат итеп ҡуябыҙ. Диспансерлаштырыу һөҙөмтәһендә дауалауға мохтаж тип табылғандарҙың 50 проценты ҡыш буйына шифаханаларҙа һаулығын нығытты. Физик һаулыҡтары ғына түгел, күңелдәре, уй-ниәттәре лә сәләмәт булһын уларҙың, тип тырышабыҙ, сөнки, йәшерен-батырыны юҡ, күпселек ауыр ғаиләлә, эскеселәр араһында йәшәргә, нисек етте - шулай йән аҫырарға мәжбүр булған уларҙың күбеһе. Киләсәктә улар үҙ хәлдәренән кәмһенмәй, ата-әсәләре һалған йөрәк яраһы өсөн бар донъяға үпкәле, асыулы кешеләр булып түгел, ә йәмғиәттең тулы хоҡуҡлы, илһөйәр, эшлекле граждандары булып үҫһендәр өсөн бөтә көсөбөҙҙө бирәбеҙ. 6 гектар еребеҙ, тиҫтәнән ашыу умартабыҙ бар. Бында балалар хеҙмәт күнекмәләренә өйрәнә. Бына тигән музейыбыҙ, үҙебеҙҙең һауыҡтырыу үҙәге эшләй, китапханабыҙ бик бай. Былтыр "Матур мәктәп"конкурсының грантын яуланыҡ. Дөйөм мәктәп эше, шөкөр, гөрләп торһа ла, һәр баланың хоҡуҡтары өсөн айырым көрәш алып барырға ла тура килә беҙгә. Мәҫәлән, етемдәрҙең торлаҡ хоҡуҡтарын яҡлап, суд эштәрендә лә ҡатнашабыҙ, ата-әсәле балаларҙы... ата-әсәләренән дә яҡлап көрәшергә тура килә: улар алимент түләүҙән баш тарта. Ә бит беҙҙән киткәс, баланың йәшәр урыны, шәхси иҫәбендә эш һәм тормош башлап алып киткәнсе йәшәрлек аҡсаһы ла булырға тейеш. Әйткәндәй, һеҙҙең гәзитте уҡыусылар араһынан, бәлки, бағыусылар ҙа табылыр әле. Һирәкләп булһа ла оло йөрәкле кешеләр килеп сығып тора ул. Мәҫәлән, республикабыҙҙың элекке һаулыҡ һаҡлау министры А.Евсюков ике балаға үҙ иҫәбенән аҡса күсерә ине. Әле беҙгә БР Ауыл хужалығы министрлығы, "Изгелек"фонды, Башҡортостан юлдаш телевидениеһы һәм башҡа бик күп изге күңелле кешеләр ярҙам итә, рәхмәт уларға. 200 бала ғаиләләр тәрбиәһенә алынған, 50-һе - патронат ҡарамағында. Бындай сара дөрөҫ, тип уйлайым, халҡыбыҙ боронхан етем баланы ҡурсыуға алып, ил-йорт менән бергә тәрбиәләгән, балалар йорто тигән нәмәне белмәгәндәр.

**(Дауамы 2-се биттә).**

*АФАРИН!*

# ҺУҢҒЫ ҠЫҢҒЫРАУ БАЙРАМЫ...

## 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатында

**Май - үҙенең байрамдары, тантаналары менән күңелдәрҙә мәңгегә урын алған ай. Унда шатлыҡ менән һағыш, шат көләү тауыштары менән күҙ йәштәре бергә үрелеп бара. Ошо көндәрҙә республика буйынса үткән һуңғы ҡыңғырау байрамы ла тап шундайҙарҙан ине. Сөнки 11-се синыф укыусылары баласаҡ менән хушлашып, оло тормош юлы туп һаһына аяҡ баҫты - һуңғы сығарылыш имтихандары тапшырғандан һуң республика буйынса 25 меңдән ашыу йәш граждан төрлөһө төрлө тарафтарға үҙ юлын, үҙ бәхетен эҙләп таралышасаҡ.**



**(Дауамы 5-се биттә).**

✓ *Күңелендә булмағандың көсләп күҙен астырыу мөмкин түгел, тик бына шундайҙарҙың, ихтимал, яңылыштан ғына етәксе, яҙыусы йә булмаһа артист тигән юғары исем "тағып" йөрөүҙәре генә аңлашылып етмәй.*



УҠЫУСЫ ҺҮҘЕ

# УҠЫМАҒАНДЫҢ...
## күңеле һуҡыр

**"Киске Өфө"- халыҡсан рухлы гәзит. Милләтебеҙ яҙмышына битараф булмаған һәр кем уны мотлаҡ алдырып уҡырға бурыслы.**

Эйе, бурыслы тип әйтәм, сөнки уны күпселек ябай халыҡ, уҡытыусылар алдыра, ә бына һәр яҡшы башланғыстың лидерҙары булып, халыҡты изге гәмәлдәргә әйҙәүсе, кәрәк саҡта милләттәштәре алдына сығып баҫып, ялҡынлы һүҙен әйтергә тейешле интеллигенция вәкилдәре был йәһәттән өлгө күрһәтә, тип әйтеүе ҡыйын, сөнки байтаҡ ҡына яҙыусыларҙың, артистарҙың, ойошма һәм учреждение етәкселәренең, хатта урындарҙағы хакимиәт башлыҡтарының да республикабыҙ баҫмалары менән бөтөнләй ҡыҙыҡһынмауын, матбуғат баҫмалары алдырып уҡымауын беләм.

"Киске Өфө"гәзитенә яҙылмаған кешеләрҙе йәлләп тә ҡуям мин. Улар тотош йыһан киңлегеләй рухиәтебеҙ донъяһынан ситтә тороусылар, тимәк. Улар халҡыбыҙ тарихы һәм традициялары, мәҙәниәт, тәрбиә, әхлаҡ мәсьәләләре буйынса бик күп һәм тәрән йөкмәткеле әңгәмәләрҙе, мәҡәләләрҙе уҡый алмай, был хаҡта фекер алышыуҙарҙа ҡатнаша, үҙ һүҙен әйтә алмай. Ҡыҫҡаһы, былдай хәлдә улар хас та һаңрау һәм һуҡыр. Икенсе яҡтан, күңелендә булмағандың көсләп күҙен астырыу мөмкин түгел, тик бына шундайҙарҙың, ихтимал, яңылыштан ғына етәксе, яҙыусы йә булмаһа артист тигән юғары исем "тағып" йөрөүҙәре генә аңлашылып етмәй. Үҙ-үҙенде алдап йәшәүҙең ни тиклем фәҡирлек, меҫкенлек билдәһе икәнлеген улар үҙҙәре тойомламай микән ни?..

**Рамаҙан ҠОТЛОБАЕВ,**
**отставкалағы хәрби хеҙмәткәр.**
**Өфө ҡалаһы.**

# РӘХМӘТЕБЕҘ...
## изге күңелле ауылдашҡа

**Хәйбулла районының бай тарихлы Мәмбәт ауылынан сыҡҡан күп кенә шәхестәребеҙ баш ҡалабыҙ Өфөлә эшләй. Улар һәр вакыт тыуған ауылына ҡайтып, ауылдаштарын ҡыуандырып, үҙҙәре лә тыуған еренән илһам, көс алып, кире Өфө тарафтарына юллана.**

Һәр йыл һайын 9 Май көнө Еңеү байрамын билдәләгәндә Мәмбәт ауылының һуғыш һәм хеҙмәт ветерандарына кҫстәнәстәр таратыу изге йолаға әүерелгән. Был йолаға нигеҙ һалыусы - Мәмбәтов Мидхәт Әхмәтхан улы. Быйыл 9 Май көнө изге традицияны дауам итеп, ауылдашыбыҙ "Башбланкиздат" йәмғиәте директоры Гөлсәсәк Ҡадир ҡыҙы Әлибаева тыл һәм хеҙмәт ветерандарына, шулай уҡ мәктәп коллективына барыһы ла яратып уҡыған "Киске Өфө" гәзитенә яҙҙырылған 40 дана квитанция бүләк итте. Быға тиклем дә ул беҙҙе тәмле кҫстәнәстәр, аҡсалата бүләк таратып ҡыуандыра торғайны.

Изге күңелле ауылдашыбыҙға ошондай тәмле һәм рухи кҫстәнәсе, ололарға ҡарата ихтирамы, иғтибары өсөн ветерандар исеменән оло рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ. Беҙҙең фатихала, туғандарын һәм яҡташтарын ҡыуандырып, үҙе лә изгелек күреп, ғаиләһе менән татыу, тыныс тормошта, иҫәнлектә-һаулыҡта йәшәүен теләп ҡалабыҙ.

**Ихтирам менән Мәмбәт ауылы ветерандары**
**исеменән Хәлимә ҠӘЙЕПОВА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Балалар - киләсәгебеҙ, тип ҡабатларға яратабыҙ. Ана шул киләсәк ышаныслы, сәләмәт һәм хәүефһеҙ булһын өсөн беҙгә ниҙәр эшләргә? Балаларҙы нимәнән һәм нисек һаҡларға?*

**(Башы 1-се биттә).**

***Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ, яҙыусы, журналист, филология фәндәре кандидаты:*** Бала - алтын баған, ти халыҡ мәҡәле. Уға тәрән мәғәнә һалынған, сөнки халҡыбыҙҙа бала үҫтереү һәм тәрбиәләүгә борондан бик ҙур әһәмиәт бирелгән. Башҡорт өсөн үҙенән һуң сәләмәт нәҫел ҡалдырыу иң беренсе бурыстарҙың береһе булған. Шуның өсөн бала тыуғас та, дөрөҫөрәге, сабый әле әсә ҡарынында саҡта уҡ уның сәләмәтлеге, матур киләсәге хаҡында хәстәрлек күрә башлағандар: йөклө ҡатынды ҡурсып, ауыр эштән, ауыр һүҙҙән, яман йә сит күҙҙән һаҡлағандар, күңеле теләгән ризыҡты ейеүенә һәм, ғөмүмән, файҙалы итеп туҡланыуына иғтибар биргәндәр. Бала тыуғас, кендек инәһе еренә еткереп бөтән йолаларҙы башҡарған: теләк теләгәндәр, Тәңренән сабыйҙың сәләмәт, тәүфиҡлы булып үҫеүен, бәхетле, оҙон ғүмерле булыуын һорағандар. Һамаҡлап, уста һикерткәндәр, бишек көйө йырлағандар - бала күңеленә йыр-моң һеңдергәндәр, әкиәт һөйләгәндәр, алама йоғонтонан һаҡлағандар. Изге теләктәр, алғыш, һүҙ көсө, туған моң бала күңеленә сәңгелдәктән шифа булып һеңгән. Бала үҫә төшкәс тә тәрбиә саралары дауам иткән. Мәҫәлән, тыйыу йолаһы бала күңелен шул уҡ изгелеккә, яҡшылыҡҡа йүнәлтеүсе бер сара. Атай кешенең роле баһалап бөткөһөҙ: баланы тәү башлап атҡа мендергән, һунарға алып йөрөткән, ҡурай уйнарға, 3-4 йәштән һөнәргә өйрәткән.

Әлеге ваҡытта балалар атаһын йүнләп күрмәй ҙә: ул эштән һуң ҡайта, иртә менән тороп китә. Борон бала тәрбиәһе институты ҡалыплашҡан, ҡанунлашҡан булған. Ҡартатайҙар, ҡартәсәй менән өләсәйҙәр ҙә бала тәрбиәләүҙә әүҙем ҡатнашҡан. Улар балаға аҡыл күндереүҙә, телен асыуҙа, телмәрен үҫтереүҙә ҙур роль уйнаған, баланы иманлы, тәүфиҡлы булырға өйрәткән. Урамға сыҡһа, унда ла бала өлкәндәр ҡурсыуына килеп эләккән: ауылдаштары тотош ырыу, йәмәғәтселек менән берлектә иҫәнләшергә өйрәтеүҙән алып үҙ-үҙенде тотоу ҡағиҙәләрен күндерер булғандар. Йәш быуын сәләмәт рухлы, яҡшы күңелле булып үҫһен өсөн беҙгә халҡыбыҙҙың бына ошо тәрбиә институтын тергеҙергә кәрәк, тип иҫәпләйем.

***Риф МИФТАХОВ, яҙыусы, шағир:*** Кешенең кем икәнлеген белер өсөн, ғәҙәттә, мин уның балаларға булған мөнәсәбәтен һынап ҡарайым. Балаларға, кейек-януарҙарға, бигерәк тә кешегә тоғролого менән айырылып торған ат һәм этҡә йомшаҡ күңелле кешеләр изгелекле була, тип уйлайым. Яңыраҡ шундай мәғлүмәт уҡыным: Рәсәйҙә 20 миллионға яҡын буйҙаҡ өйләнмәй йөрөй, 10 миллионға яҡын ҡатын-ҡыҙ яңғыҙ бала тәрбиәләй. Шунан иҫәпләп ҡарағыҙ инде - күпме етем бала үҫә. Ил сәйәсәтенең дә төп йүнәлеше балаларға булған мөнәсәбәттән сығып билдәләнә. Йәш быуынға илһөйәр, эшсән, намыҫлы граждандар булып үҫеү өсөн ниндәй шарттар тыуҙырыла, киләсәктә илдең нигеҙе тура-нан-тура шуға бәйле буласаҡ. Һуңғы ваҡыт ил Президенты Владимир Путин балалар хоҡуҡтарын яҡлау мәсьәләләренә иғтибарҙы көсәйтте, ошо йүнәлештә махсус ҡарарҙар, указдар ҡабул ителә. Мәҫәлән, етем балаларҙы сит ил граждандарына уллыҡҡа биреүҙе тыйыу, миненсә, дөрөҫ булды, сөнки үҙебеҙҙең проблемаларҙы үҙебеҙ хәл итергә тейешбеҙ. Икенсенән, был илдең кескәй граждандарының хоҡуҡтарын яҡлау ҙа. Ата-әсәһе булмаған хәлдә лә улар туғандары, яҡындары эргәһендә, ғөмүмән, тыуған илендә тәрбиәләнергә тейеш, тигән фекерҙәмен.

Бөгөнгө ата-әсәләр балаларын киләсәктә ҙыллы тормош көтөүгә әҙерләргә тейеш, юғиһә, бала имтихан бирәме, юғары уҡыу йортона уҡырға инәме, армия сафына алынамы - бөтәһе артынан да үҙҙәре йүгерә. Фатир, машина, дача уларға былай ҙа күптән әҙер, ҡалғанын бала уҡып сығып, һөнәр алғас, үҙе эшләп, тир түгеп ярларға тейеш. Балаларҙы үҙаллылыҡҡа өйрәтеү етмәй беҙҙә. Халыҡса әйткәндә, "әҙергә - бәҙер" кәйефенән бик тә ҡурсаларға кәрәк балаларҙы.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Гәзитебеҙгә яҙылып, һеҙ баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын билдәләйһегеҙ, туған телгә, мәҙәниәткә тоғролоҡто, ихтирамды, хатта аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтәһегеҙ икәнен иҫегеҙҙән сығармаһағыҙсы.**

● Шулай итеп, 2013 йылдың икенсе яртыһына **50665** индекслы **"Киске Өфө"** гәзитенә **378 һум 36 тингә** яҙылырға була. Майҙа гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға еҫәреүсе тәүге 10 уҡыусыбыҙ - Ноғман Мусиндың **"Алдар батыр"**, 10 уҡыусыбыҙ Рауфан Мортазиндың **"Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"**, 10 уҡыусыбыҙ Гүзәл Ситдиҡованың **"Күсле ил - көслө ил"**, 10 уҡыусыбыҙ Мәрйәм Бураҡаеваның **"Көҙгө ысыҡ"** китаптарына лайыҡ буласаҡ.



● **Тағы.** Гәзитебеҙгә бар йәмәғәт менән яҙылған Баймаҡ районы Ярат ауылы халҡы өлгөһөнә эйәргән ауылдарға, коллективтарға **"Кескәй китапхана"** бүләк итәбеҙ. Был китапханала **"Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"**, **"400 башҡорт халыҡ йыры"**, башҡортса **"Көрьән-Кәрим"**, С. Руденкоың **"Башҡорттар"**, **"Башҡорт костюмы"** баҫмалары, Ноғман Мусиндың **"Алдар батыр"** һәм башҡа китаптар бар.

● Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә тыуған көндәрен хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы **тыуған көнө менән ҡотлау** - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов мәктәпкәсә белем биреү мәсьәләләре буйынса селектор кәңәшмәһендә ҡатнашты, сараны Рәсәй Хөкүмәте рәйесе Дмитрий Медведев алып барҙы. Хөкүмәт башлығы хәбәр итеүенсә, 2013 йылда төбәктәр мәктәпкәсә белем биреү учреждениелары системаһын үҫтереүгә 50 миллиард һум күләмендә субсидия аласаҡ. Билдәләнеүенсә, маҡсат - ҡыҫҡа ваҡыт эсендә, 2016 йылға, мәктәпкәсә белем биреү учреждениеларында яҡынса 1 миллион 200 мең яңы урын булдырыу.

✓Сыуаштан Республикаһында Башҡортостан мәҙәниәте көндәре булып үтте. Төп мәҙәни сараны асыу тантанаһы Сыуаш дәүләт опера һәм балет театры алдындағы майҙанда ойошторолдо. Башҡортостан мәҙәниәте көндәре программаһы сиктәрендә Республика Президенты Сыуаштан башлығы Михаил Игнатьев менән осрашты, "Еңеү" мемориаль комплексында Дан монументына сәскәләр һалды, Сыуаштан милли музейы экспозицияһы менән танышты. Артабан Сыуаштан Республикаһының Милли китапханаһында Башҡортостан яҙыусыларының уҡыусылар менән осрашыуы булды. Шулай уҡ күп милләтле төбәктәр өсөн күп телле электрон китаптар баҫтырыу буйынса оҫталыҡ дәрестәре ойошторолдо. Республиканың сәнғәт оҫталары гала-концертында "Далан", "Арғымаҡ", "Сәрби" төркөмдәре, Йәмил Әбделмәнов, Алена Завьялова сығыш яһаны.

✓Республика йортонда күп балалы әсәләрҙе "Әсәлек даны" миҙалы менән наградлау тантанаһы үтте. Сараны БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Лилиә Ғүмәрова алып барҙы. Юғары наградалар менән ҡотлап, Лилиә Ғүмәрова 56 әсәгә миҙалдар һәм бер тапҡыр биреләә торған аҡсалата премиялар тапшырҙы. БР Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы мәғлүмәте буйынса, бөгөнгө көнгә "Әсәлек даны" миҙалы менән йәмғеһе 5700 ҡатын наградланған.

✓БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаттары ҡарары буйынса, Нуриман районында Тирәкле ауылы тергеҙеләсәк. Тирәкле ауылы 1982 йылда теркәү иҫәбенән алынған һәм әлеге ваҡытта дача ҡасабаһы булып иҫәпләнә. Бөгөнгө көндә унда даими рәүештә бер ғаилә йәшәй, ҡалғандары яҙғы, йәйге һәм көҙгө осорҙарҙа хужалыҡ эштәрен алып бара. Ауылда электр уты бар. Урындағы халыҡ мал аҫрай, баҡса участкаларын эшкәртә, йәшелсә үҫтерә, умартасылыҡ менән шөғөлләнә. Ауылдың элекке исемен һаҡлап ҡалырға ҡарар ителде.

✓ *Сыңғыҙхандың улы Джучинан алып Үзбәк ханға тиклем хандарҙың тик монгол исем-шәрифле булып килеп, Үзбәк хандан һуң төркисәгә, ғәрәпсәгә әүерелеүенә шаһитбыҙ был исемлектә.*



*МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ*

# БУЛЫР БАЛА БИШЕКТӘН

**Был әйтемдең варианттары: "Булыр бала биләүҙән", "Алтылағы - алтмышта", "Баланы бишектән, ҡатынды баштан өйрәт", "Баланы - баштан, ҡатынды - йәштән", "Баланың ғәйебе - ата-инәнеке", "Булыр баланың ҡылығы яҡшы булыр", "Булыр ҡолон бәйҙә уйнар", "Булыр-булмаҫ баланың барынан юғы артыҡ", "Булыр ат ҡолон сағынан билдәле", "Бүре балаһын бүреккә һалһаң да, урманға ҡарай", "Бүре балаһы эт булмаҫ", "Ананан ала ла тыуа, ҡола ла тыуа", "Ҡанға һеңгәнде йыуып та, юнып та бөтөрөп булмай" һ.б.**



Совет осоро педагогикаһында тәрбиә хаҡында шундайыраҡ бер принцип йәшәне: бала - аҡ ҡағыҙ, уға нимә яҙһаң, шул була. Тик шулаймы икән? Бер яҡтан ҡарағанда, был һүҙҙәрҙә хаҡлыҡ та бар кеүек. Ысынлап та, баланы бишектән алып үҙенә кәрәкле йүнәлештә тәрбиәләп булалыр, йәғни аҡ ҡағыҙға нимә яҙһаң, шуны уҡый алаһыңдыр, сабыйҙа ниндәй шәхес күрергә теләһәң, шуны күреп булалыр кеүек. Әммә барыбер бындай шарт мәсьәләнең тик бер яғын ғына тәшкил иткән кеүек. Ни өсөн тигәндә, тап ошо принцип буйынса бер нисә быуын тәрбиәләгән йәмғиәттә, ижтимағи ҡоролошта йәшәй-йәшәй, донъя океаны буйлап ултырып барған карабыбыҙҙы саҡ ҡына дауыл һелкеткәйне, барыһы ла емерелде лә төштө. Улай ғына ла түгел, аҡ ҡағыҙға яҙылған тәғлимәт, хәҡиҡәттән, тәбиғи ерлектән бик-бик алыҫ булғанлыҡтан, ул бер нисә быуын кешеләрен ике төрлө аң, ике төрлө ҡан, ике ижтимағи ҡоролош аралығындағы маргинал хәлгә ҡуйҙы. Ул аҡ ҡағыҙға яҙылғандар хәҙер инде уҡығыһыҙ сүрәткә ингән, күптәр хатта тормош көтөүгә яраҡһыҙ булып сыҡты.

Миҙалдың икенсе яғы ла бар бит әле. Бына, мәҫәлән, меңәр йылдар, күп быуаттар тәжрибәһе һәм һөҙөмтәһе булараҡ барлыҡҡа килгән халҡыбыҙ әйтемдәре һәм мәҡәлдәре тәрбиәнең был принцибын бар йәһәттән инҡар итә. Әйтәйек, "Алтылағы - алтмышта", "Бүре балаһын бүреккә һалһаң да, урманға ҡарай", "Бүре балаһы эт булмаҫ", "Ҡанға һеңгәнде йыуып та, юнып та бөтөрөп булмай" тигәндәре. Уларҙың барыһын да "Булыр бала бишектән" тигәне дөйөмләштереп торған кеүек.

Нимә генә тиһәк тә, тәрбиәсе бары тик баланың ҡанына һалынғанды аңына сығарыусы, шуны үҫтереүсе генә булып торалыр. Ҡанға яҙылғанды башҡаса йөкмәткеле итеп аңға сығарыу ҙа мөмкин түгелдер. Компьютерҙа бер төрлө шрифт менән йыйылған тексты икенсе компьютерҙа асып уҡып булмағанына оҡшаған был хәл-күренеш. Бүре балаһын бүреккәме, күреп-кәме һалһаң да, ул барыбер ҙа бер килеп үҙенең бүрелек асылын күрһәткән, йәғни бүреккә һалыусыны өҙгөләп ташлаған кеүек, ҡанға һеңгәнде йыуып та, юнып та бөтөрөп булмайҙыр инде. Быға бик күп миҫалдар, дәлилдәр, иҫбатламалар килтерергә булыр ине. Тормошобоҙҙоң һәр өлкәһендә был йәһәттән миҫалдар тулып ята. Әммә мин ул миҫалдарға туҡталып тормайынса, уҡыусыға мәсьәләнең асылын тәрәнерәк итеп аңлатыу маҡсатында Алтын Урҙа хандарының исемдәрен һәм уларҙың хакимлыҡ иткән йылдарын ғына килтереп үтәм:

Джучи - Сыңғыҙхандың улы, (1224-1227).

Батый - Джучиның улы (1227-1255).

Сартак - Батыйҙың улы (1255-1256).

Улағсы - Батыйҙың (йәки Сартактың) улы (1256-1257).

Берке - Джучиның улы (1257-1266).

Мәнгү Тимер - Батыйҙың ейәне (1266-1282).

Туҙа Мәнгү хан - Батыйҙың ейәне, (1282-1287)

Тула Буға хан - Батыйҙың бүләре (1287-1291).

Гийәс әд-дин Тохтогу хан - Мәнгү Тимерҙең улы (1291-1312).

Гийәс әд-дин Мөхәммәт Үзбәк хан - Мәнгү Тимерҙең ейәне (1312-1341).

Үзбәк хандан һуң төрлө йылдарҙа хакимлыҡ иткән хандарҙың исемдәре: Тинебәк хан (1341-1342), Йәләлитдин Мәхмүт Йәнбәк хан (1342-1357), Бирҙебәк хан (1357-1359), Ҡулпа хан (1359-1360), Мөхәммәт Наурызбәк хан (ғинуар-июнь 1360), Мәхмүт Хызыр хан (1360-1361), Тимер Хужа хан (август-сентябрь 1361), Килдебәк хан (1361-1362), артабан Морат, Әмир Булат, Ғәзиз шәйех, Абдулла, Хәсән, Бүләк һ.б. хандар.

Бына ошо исемлектән сығып, ниндәй һығымта яһарға була тип уйлайһығыҙ? Эйе, һеҙ һис тә яңылышмайһығыҙ: Сыңғыҙхандың улы Джучинан алып Үзбәк ханға тиклем хандарҙың тик монгол исем-шәрифле булып килеп, Үзбәк хандан һуң төркисәгә, ғәрәпсәгә әүерелеүенә шаһитбыҙ был исемлектә. Был ниндәй хәҡиҡәтте иҫкә төшөрә: эйе, бүре балаһын бүреккә һалһаң да, урманға ҡарай йәки ҡанға һеңгәнде йыуып та, юнып та бөтөрөп булмай.

Ошо урында аҙ ғына тарих төпкөлөнә сәйәхәт яһайыҡ. Ә кем һуң ул Джучи? Ул - Сыңғыҙхандың беренсе ҡатыны Бүртәнән тыуған улы. Бүртә - төрки ҡәүемдән, уңғырат ырыуынан. Уны меркеттәр урлағас, буласаҡ Сыңғыҙхан-Темуджин меркеттәргә яу менән барып, яратҡан кәләшен кире ҡайтарып ала. Бүртә Сылғыр-бохо атлы меркет батырынан ауырға ҡалған була, ҡайтышлай юлда сабыйы тыуа. Малайға юлда тыуғанға күрә Юлсы, йәғни Джучи тип исем ҡушалар. Темуджин ҡатынын ныҡ ярата, шуға күрә Джучины үҙ улындай яҡын ҡабул итә, барыһына ла, Бүртә меркеттәргә әсирә булғанға тиклем үк ауырлы ине, тип белдерә.

Әгәр ҙә Темуджин ҡасандыр килеп төркиҙәр монгол ҡағанын, ханлыҡты үҙ ҡулына төшөрөрөн, бигерәк тә бүре балаһын бүреккә һалһаң да, урманға ҡарай, тигән хәҡиҡәтте аңлаһа-белһә, моғайын да, тап-таҙа төрки ҡанлы Джучины үҙ улы итеп ҡабул итеүҙән дә баш тартыр ине лә, бәлки беҙ Алтын Урҙаның бөтөнләй башҡа төрлө тарихына шаһитлыҡ ҡылыр инек. Кем белә, бәлки был осраҡта Алтын Урҙа империяһының ғүмере беҙ белгәндән ҡыҫҡараҡ та булыр ине. Ни тиһәң дә, үҙенә ҡаршы сыҡҡан, һаман да Тәңрегә табынған сыңғыҙсыларҙы юҡ итеп (Сыҙғыҙхандың тәңреселеккә иң тоғро һаналған 120 монгол ҡанлы вариҫы язалап үлтерелә) тәхеткә ултырған, Исламды империяның дәүләт дине итеүгә өлгәшкән Үзбәк хан дәүере Алтын Урҙа империяһының иң ныҡ үҫешкән, донъяның барлыҡ дәүләттәре араһында иң ныҡ абруй-дан ҡаҙанған, цивилизациялы дәүере тип нарыҡлана. Әлбиттә, төркиселектең алға сығыуы, тәңреселектең сигенеүе империя өсөн прогрессив күренеш булған. Был айырым һөйләшеүҙе талап иткән ҙур мәсьәлә. Шулай ҙа Темуджин Сыңғыҙханға әүерелгән 1206 йылдан алып Үзбәк хан власҡа килгән 1312 йылға тиклем 106 йыл буйы монголдар ҡулында булған хакимлыҡтың төркиҙәр ҡулына күсеүендә юғарыла килтерелгән сәбәптең дә барлығын танырға тура килә барыбер. Ә бит яңы ойошҡан империяла тәртип тә, тәрбиә лә бик ҡаты булған, әммә ҡан барыбер ҙә үҙенекен иткән. Булыр бала бишектән шул. Һүҙемде Рәми Ғариповтың бер исемһеҙ шиғыры менән тамамлайым:

*Булыр бала бишектән,*  
*Илгә сығыр ишектән.*  
*Булырҙайға бер әйт тә,*  
*Булмаҫтайға мең әйтмә.*  
*Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы -*  
*Таш сүлмәкте киңәйтмә.*  
*Киңәйтергә кирге юҡ,*  
*Арғы яҡта бирге юҡ -*  
*Табалмабыҙ барһаҡ та,*  
*Тигеҙ түгел бармаҡ та...*

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Өфөгә Халыҡ-ара шашка буйынса донъя чемпионатына 24 илдән 40 иң көслө уйынсы киләсәк. Бәйге 2-19 июндә "Йәшел сауҡалыҡ" шифаханаһында үтә. "Башнефть" профессиональ шашка клубы рәйесе Юрий Черток, бындай кимәлдәге сара Рәсәйҙә тәүге тапҡыр үткәрелә, тип билдәләне. Беҙҙең ил исеменән чемпионатта алты уйынсы, шул иҫәптән өс Башҡортостан спортсыһы сығыш яһаясаҡ. Улар - бөгөнгө көндә донъя чемпионы булған Александр Георгиев, Муродулло Амриллаев һәм Айнур Шәйбәков. Шулай уҡ Рәсәй данын күп тапҡыр донъя чемпиондары Александр Шварцман, Алексей Чижов һәм Александр Гетманский яҡлаясаҡ. Сараны асыу тантанаһы 2 июндә "Йәшел сауҡалыҡ" шифаханаһының Ял үҙәгендә 12 сәғәттә башлана.

✓БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайҙың сираттағы ултырышында "Башҡортостан Республикаһында мәғариф тураһында"ғы закон проекты беренсе уҡыуҙа ҡаралды. Унда башҡорт теленең дәүләт теле булараҡ бөтә дәүләт һәм муниципаль уҡыу учреждениеларында ла уҡытыласағы тураһында әйтелә.

✓"Баш ҡаланы республика балаларына бүләк итәйек" хәйриә проектында еңеү яулаған 300-ҙән ашыу кеше Өфөгә саҡырылды. Улар Еңеү паркында үткән наградлау тантанаһында һәм Өфө буйлап экскурсияла ҡатнашты. Быйыл акцияла Башҡортостандың ете ҡалаһы, 17 районы һәм 18 ауылынан 65 команда ҡатнашты. Проектта ҡатнашыусылар бер меңдән ашыу ағас ултыртты, йөҙҙән ашыу сыйырсыҡ ояһы эшләп элде. Мәктәп уҡыусылары урамдарҙы төҙөкләндерҙе, экологик өмәләр үткәрҙе, йылға һәм күл ярҙарын сүп-сарҙан таҙартты. Конкурс комиссияһы ултырышы һөҙөмтәләре буйынса, хәйриә проектында 21 команда еңеүсе тип табылды.

✓БР Фәйзи Ғәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле Төркиәнән ҡайтты. Унда бейеүселәр ТӨРКСОЙ тарафынан ойошторолған халыҡ-ара йәштәр һәм спорт байрамында һәм төрки телле илдәр мәҙәниәте һәм сәнғәте фестивалендә ҡатнашты. Башҡортостан бейеүселәре Анкара, Силифке, Караман ҡалаларында иң яҡшы башҡорт бейеүҙәрен тәҡдим итте. Улар араһында - "Гөлнәзирә", "Еҙ үксә", "Бөрйән ҡыҙҙары", "Ҡурай" һәм башҡа бейеүҙәр.

**"Башинформ"дан.**

**✓ Өфө буйынса 25 йәшкә тиклемге ҡатын-ҡыҙҙың балаһынан баш тартыу осрағы республика райондарынан килеүселәргә тура килә: 30-40 йәшлектәр, ғәҙәттә, икенсе йә өсөнсө балаһынан баш тарта.**



*...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*

# САУҘА ГӨРЛӘЙ...

## ҡанунға ярашлы

**Ниһайәт, көндәр йылынды, һәм халыҡ, һәр йылдағыса, эштән һуң ял урыны итеп йылға буйҙарын йәки ҡала эсендәге йәйге кафеларҙы һайлаясаҡ. Әммә былтыр йәмәғәт туҡланыуының был төр предприятиеһы 160 тип иҫәпләнһә, быйыл уларҙың һаны 100-гә ҡалдырыласаҡ.**

Йәйге кафеларҙың кәмеүе, тәү сиратта, объекттарҙы ер бүлеүгә ҡағылышлы ҡануниәткә тап килтереүгә бәйле булһа, икенсенән, Дуҫлыҡ монументы районын һәм Мәжит Ғафури исемендәге парк территорияһын төҙөкләндереү, реконструкциялау сәбәпле, был территорияла быйыл йәмәғәт туҡланыуы нөктәләре булмаясаҡ. Ошо хаҡта ҡала округы хакимиәтендәге сираттағы матбуғат конференцияһында сауҙа һәм хеҙмәттәрҙе координациялау идаралығы етәксеһе Ирина Рублева белдерҙе. Аңлауыбыҙса, һүҙ стационар булмаған (миҙгел сауҙаһы) сауҙа объекттарын урынлаштырыу хаҡында барҙы. Бөгөн стационар булмаған сауҙа объекттарын урынлаштырыу өсөн 834 майҙансыҡ ҡаралған. Шул иҫәптән уларҙың 70 объекты - "киоск" һәм "павильон", 764 объект миҙгел сауҙаһы рәүешендә (лоток йәки автофургон). Быйыл объекттар һаны 123-кә кәмегән. Бының сәбәбе, беренсенән, 2013 йылдың 1 ғинуарынан ғәмәлгә ингән Сауҙа ҡағиҙәһенә үҙгәрештәр индереү (стационар булмаған күсмә сауҙа объекттарынан туңдырма, алкоголһеҙ эсемлектәр, кондитер һәм ҡаптарға төрөлгән икмәк-булка изделиеларын һатыуҙан тыш), йәғни йәшелсә-емеш менән бары тик автофургондарҙан ғына һатыу итеүгә рөхсәт бирелеү менән бәйле булһа, икенсенән, һыраны ла индереп, алкоголь продукцияһын һатыуға сикләү индереүҙә. Был бик күп сауҙа объекттарының ябылыуына, ҡайһы берҙәренең үҙенең эшмәкәрлеген икенсе йүнәлешкә көйләүгә килтергән. Киләсәккә фараз ҡылғанда инде, 2014 йылдың 1 июненән киоскыларҙа тәмәке изделиеларын һатыуҙы тыйыу тураһында ҡанун үҙ көсөнә инһә, был да бихисап киоскыларҙың ябылыуына килтерәсәк. Ләкин был күренештәр халыҡтың сауҙа майҙансыҡтары менән тәьмин ителеүенә йоғонто яһамаясаҡ, сөнки киоскылар һәм павильондар дөйөм ҡала сауҙа майҙанының ни бары өс процентын ғына алып тора.

Әйткәндәй, шәхси баҡсаларында һәм йорттарында үҫтергән продукцияны һатыуға сығарыусы, нигеҙҙә, пенсионер әбей-бабайҙар ҡаланың ике күмәртәләп һатыу баҙарында һәм 22 сауҙа комплексында 620 урынды бушлай биләй ала. Бының өсөн уларға баҡса паспортын һәм пенсия кенәгәһен генә күрһәтергә кәрәк. Шулай уҡ урамдарҙа ла 200 урынлыҡ 7 сауҙа майҙансығы эшләнгән. Дим районында: Мусоргский урамы, 19Б (10 урын); Калинин районында: Азатлыҡ урамы, 6-сы йорттоң ҡаршыһындағы майҙансыҡ (36 урын); Киров районында: Мөбәрәков урамы, 22 (50 урын); Октябрь районында: Р. Зорге урамы, 44, "Байрам" магазины алдында (25 урын); Совет районында: Революцион урамы, 88 (12 урын), Комсомол урамы, 18 (41 урын), Менделеев урамы, 171 (37 урын). Уларҙа ла урындар бушлай, бары тик сауҙа айырым талаптарға һәм санитар нормаларға тап килергә тейеш. Шуға ҡарамаҫтан, әле Өфөлә 500 кеше ҡасып-боҫоп сауҙа иткән 55 "нөктә" иҫәпләнә. Ә билдәле булыуынса, билдәләнмәгән урында сауҙа итеүселәр административ яуаплылыҡҡа тарттырыла. 20 майға ҡарата 2300 кешегә дөйөм алғанда 875800 һум күләмендә штраф һалынған да инде.

**Земфира ХӘБИРОВА.**

*...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*

**Өфө ҡалаһында Рәсәйҙә беренсе тапҡыр социаль етемлекте комплекслы иҫкәртеү буйынса пилот проекты тормошҡа ашырыла. 16-17 майҙа ошо моделде баш ҡала территорияһында ҡулланыу һәм уны тормошҡа ашырыу буйынса семинар-кәңәшмә үтте. Матбуғат конференцияһының сираттағы ултырышы тап ошо темаға арналды ла инде. Уның эшендә ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов, ҡала хакимиәтенең опека һәм попечителлек буйынса идаралығы начальнигы Руслан Хәбибов, Социаль етемлекте иҫкәртеү мәрхәмәтлек фондының әйҙәүсе белгесе, психология фәндәре докторы Дмитрий Григорьев (Мәскәү), Фондтың төбәк программаларын координациялаусы Анастасия Неретина ҡатнашты.**

# МАҠСАТ БИЛДӘЛЕ:

## етемдәрһеҙ ҡала!



Бөгөн баш ҡалала 17 йәшкә тиклемге 194605 бала иҫәпләнә. Шуларҙың 3500-ҙән ашыуы етем балалар сифатында опека йәки попечителлек органдарында иҫәптә тора. 460 бала интернаттарҙа тәрбиәләнә. Был типтағы учреждениеларҙа булыусылар һаны йыл һайын кәмеһә лә, Өфөлә йылына 500 баланың ата-әсә тәрбиәһенән мәхрүм ҡалыуы асыҡлана. Сынтимер Биктимер улы белдереүенсә, социаль етемлек проблемаларын хәл итеү 2012-2017 йылдарға иҫәпләнгән Милли стратегияның өҫтөнлөклө йүнәлештәренең береһе итеп билдәләнгән. Йәғни ғаиләнең именлеген йәки имен түгеллеген иртә асыҡлау, социаль хәүефле хәл-торошта ҡалған ғаиләләрҙе реабилитациялау, бәлиғ булмағандарҙың хоҡуҡтарын һәм хоҡуҡи мәнфәғәттәрен яҡлау дәүләттең ғаилә сәйәсәтенең кисекмәҫтән хәл ителергә тейешле төп бурыстары булып тора.

Әлегә тиклем дә ҡала хакимиәте тарафынан был йүнәлештә бихисап эштәр башҡарыла ине. Мәҫәлән, 2010 йылда ошо өлкә буйынса яуаплы органдарҙың һәм ведомстволарҙың үҙ-ара хеҙмәттәшлеге тәртибе раҫлана. Баш ҡала райондарының социаль етемлекте иҫкәртеү буйынса эш тәжрибәһе баланы үҙ ғаиләһенә ҡайтарыу, көрсөккә килеп терәлгән ғаиләнең проблемаларын асыҡлап, уны һаҡлап ҡалыу һәм үҫтереүҙең бары тик комплекслы ҡараш булғанда ғына уңышлы тормошҡа ашырылыуын раҫлай.

Ә хәҙер инде был эштең яңы проект ярҙамында тағы ла һөҙөмтәлерәк булырына өмөт бар. Ул ике йылға планлаштырылған һәм һигеҙ йүнәлеште үҙ эсенә ала. Мәҫәлән, шул йүнәлештәрҙең береһе булып социаль етемлекте алдан иҫкәртеү тора. Белгестәр билдәләүенсә, был процесс бер көн эсендә генә барлыҡҡа килмәй, ә йылдар дауамында шеш кеүек тулышып, бер килеп һытыла. Ә инде ошо күренеште булдырмау өсөн үҙенсәлекле һайлау алдында торған ғаиләгә психологик ярҙам күрһәтеп, һөйләшеп, дәүләт ячейкаһын һаҡлап ҡалырға мөмкин. Шулай уҡ ғаиләгә көрсөктөң төрлө этаптарында реабилитация үткәреү ҙә мөһим. Яңы проект уның төрлө формаларын, ошо йүнәлештә эшләүсе белгестәрҙе әҙерләүҙе күҙаллай, балалар тәрбиәләнгән социаль реабилитация үҙәктәренең һәм приюттарҙың балалар йорттарына әйләнеүенә юл ҡуймауҙы контролләй. Фондтың бөгөнгә иң киң ҡулланылған һәм 20 төбәккә таралған моделе - яңы тыуған сабыйҙарҙан баш тартыуҙы иҫкәртеү. Эштең һөҙөмтәһен инде түбәндәге факт та дәлилләй: былтыр Рәсәйҙә яңы тыуған сабыйҙарҙан баш тартыуҙың 6230 осрағы теркәлһә, шул иҫәптән Фондтың төрлө төбәктәге партнерҙарынан 710 осраҡ тураһында мәғлүмәт туплана, алып барылған эшмәкәрлек ярҙамында 375 бала үҙ ғаиләһенә ҡайта. Йәғни эшмәкәрлек һөҙөмтәһе 50 процент тәшкил итә. Баш ҡалала иһә былтыр яңы тыуған сабыйҙарҙан баш тартыуҙың 49 осрағы теркәлһә, шуларҙың 19-ы кире үҙ ғаиләһенә ҡайтарылған.

"Бында кешене инандырып ҡына баланы ғаиләһенә кире ҡайтарыу мөмкин түгел. Ундай саҡта әсә кеше һуңыраҡ балаһынан икенсе тапҡыр баш тартыуы мөмкин. Шуға күрә, ни өсөн баш тартыуының сәбәптәрен асыҡлап, белгестәр менән һөйләштереп, әсәнең аңлы рәүештә, үҙ теләге менән сабыйын алып ҡайтыуына өлгәшеүҙе маҡсат итеп ҡуябыҙ. Күп осраҡта йәш әсәләр ата-әсәһенән ҡурҡып йәки үҙҙәре бер нәмә хәл итергә өйрәнмәгәнлектән (психологик аспект) балаһынан баш тарта, ҡайһы бер осраҡта бында төп ролде матди фактор уйнай - йәшәр урын юҡ, - ти Д. Григорьев. - Был мәсьәләне хәл итеү өсөн социаль ҡунаҡханалар ойоштороу мәсьәләһен дә хәл итергә кәрәк. Ул реабилитация процесының бер өлөшө булып тора".

Фонд белгестәре әйтеүенсә, сабыйҙарынан баш тартыусыларҙы аныҡ ҡына теге йәки был төркөмгә индереү мөмкин түгел. Шулай ҙа, дөйөмләштереп әйткәндә, уларҙың яртыһы асоциаль тормош алып барһа, 50 проценты аҙ тәьмин ителгән ғаиләләрҙән. Йәш буйынса ҡарағанда инде, нигеҙҙә, улар 14- 45 йәшлек ҡыҙҙар һәм ҡатындар.

Руслан Хәбибов белдереүенсә, Өфө буйынса 25 йәшкә тиклемге ҡатын-ҡыҙҙың балаһынан баш тартыу осрағы республика райондарынан килеүселәргә тура килә: "Улар махсус рәүештә, был аҙымын алдан уйлап эшләй. Хатта документтарын да алып килмәйҙәр". 30-40 йәшлектәр араһында инде ғаиләлә бер йәки ике бала тәрбиәләүселәр. Улар, ғәҙәттә, икенсе йә өсөнсө балаһынан баш тарта. Ә инде 18 йәшкә тиклемгеләр - ата-әсәһе ихтыярына буйһоноусылар. Бында, нигеҙҙә, ата-әсә ейән-ейәнсәрҙәренән баш тарта. Бик һирәк булһа ла, олатай-өләсәйҙәрҙең сабыйҙарҙы ғаиләгә алып ҡайтҡан осраҡтар ҙа бар. "Нимә аптырата, - ти Руслан Таһир улы, - был категорияла яҡшы, етеш тормошта йәшәгән, матур ғаиләләрҙә үҫкән, мәктәптә яҡшы уҡыған ҡыҙҙар йыш осрай".

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Йыл башында ғына Өфө Ауыр тормош хәлендә ҡалған балаларға ярҙам итеү фонды менән Рәсәйҙең бәләкәй һәм урта ҡалалары ассоциацияһы тарафынан ойошторолған "Етемдәрһеҙ ҡала" конкурсында ҡатнашып, еңеү яулағайны. Әле яңы индерелгән пилот проекты был йүнәлештә тағы ла һөҙөмтәлерәк эшләүгә этәргес булырына ышанғы килә. Ниндәйҙер конкурстарҙа еңеү өсөн түгел, ә ҡасандыр бер көн килеп Өфөнө етемдәрһеҙ ҡала итеү өсөн...**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Анкарала ТӨРКСОЙ ағзалары булған 25 илдән 28 профессиональ ижад коллективы сығыш яһаны. Бер нисә көн эсендә ҡуйылған 400 бейеүсе ҡатнашлығындағы төрөк бейеүе байрамдың төп ваҡиғаһы булды.

✓Мәскәү - Ҡаҙан - Екатеринбург юғары тиҙлекле тимер юл магистрале Өфө аша үтәсәк. Магистраль РФ Президентының "Рәсәй Федерацияһында юғары тиҙлекле тимер юл транспроты хәрәкәтен ойоштороу саралары тураһында"ғы Указына ярашлы төҙөлә. Владимир Путин Сочи ҡалаһында ошо мәсьәләгә арналған кәңәшмә үткәрҙе. Был проектты тормошҡа ашырыу өсөн 920 млрд. һум аҡса кәрәк буласаҡ.

✓Башҡортостанда инвалид баланы уллыҡҡа алған граждандар өсөн бер тапҡыр түләнә торған пособие күләмен 500 мең һумға тиклем арттырыуҙы күҙ уңында тотҡан проект закон статусын алды. Был туралағы закон проекты БР Дәүләт Йыйылышының пленар ултырышында икенсе һәм өсөнсө уҡыуҙарҙа тикшерелде.

✓Магнитогорскиҙа беренсе тапҡыр "Башҡортостан продукцияһы көндәре" үтте. Әлеге күргәҙмә Магнитогорск халҡында ҙур ҡыҙыҡһыныу уятты. Сарала милли костюмдар, тирмәләр, халыҡ промыслалары стендтары, сувенирҙар, биҙәүес әйберҙәре тәҡдим ителде. Аҙыҡ-түлектән бал, ит һәм колбаса изделиелары, һөт продукцияһы булды. Баҡсасылар өсөн төрлө ашламалар, мини-тракторҙар һатылды. Йәмғеһе егермерән ашыу компания һәм предприятие Магнитогорск халҡына үҙ продукцияһын тәҡдим итте.

✓2013 йылдың дүрт айында Башҡортостанда 17358 сабый, шул иҫәптән 8905 малай һәм 8453 ҡыҙ тыуған. 176 ғаиләлә игеҙәк балалар тыуған, тип хәбәр иттеләр Социаль страховкалау фондының төбәк бүлексәһенән. Республикала бала табыусыларҙың уртаса йәше - 28. Яңы тыуған сабыйҙарҙың уртаса ауырлығы - 3,34 кг, буйы 52,04 см тәшкил итә. Бала табыу сертификаттары менән 17182 ҡатын файҙаланған.

✓Ведомствонан хәбәр итеүҙәренсә, тыуым күрһәткестәре буйынса республика Волга буйы федераль округында алдынғы позицияны биләй, Рәсәй буйынса иһә бишенсе урында тора.

АФАРИН!

# ҺУҢҒЫ ҠЫҢҒЫРАУ БАЙРАМЫ...



## 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатында

(Башы 1-се биттә).

Башҡортостан өсөн кадрҙар һандалы булып торған Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатындағы тантана 179 сығарылыш уҡыусыһының күңелендә ғүмерҙәренең иң матур ҙа, һағышлы ла мәле булып, ғүмер буйы һаҡланасаҡ, әлбиттә. Сөнки тап ошо көн уларҙы ысын мәғәнәһендә өлкәнәйтеп ебәргәндәй.

Тантаналы линейкала йыйылыусыларҙы һәм сығарылыш уҡыусыларын тәбрикләп, гимназия директоры Әлфир Ғайсин шундай һүҙҙәрен еткерҙе: "70 йыллыҡ бай тарихы булған данлыҡлы уҡыу йорто бына тағы үҙенең уҡыусыларын ҙур тормош юлына сығара. Алдығыҙға ҙур маҡсаттар ҡуйылған. Тормоштоң бар һынауҙарын лайыҡлы үтер өсөн үҙегеҙҙән көслө ихтыяр, түҙемлек, тырышлыҡ талап ителә. Маҡсаттарығыҙҙы аныҡ билдәләп, ауырлыҡтар алдында ҡаушап ҡалмайынса, уларҙы еңеп, гел алға барып, бөтөн көсөгеҙҙә биреп, тыуған илегеҙҙе тырыш хеҙмәтегеҙ менән биҙәгеҙ. Был - бөйөк халҡыбыҙ алдындағы иң изге бурысығыҙ. Аҡ юл һеҙгә!"

Өфө ҡала округы хакимиәтенең гуманитар мәсьәләләр буйынса бүлек етәксеһе, ҡасандыр ошо гимназияны тамамлаусы шағирә Зөлфиә Ханнанова сығарылыш синыфы уҡыусыларын ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялалов исеменән ҡотланы: "Гимназист булыуығыҙ һеҙгә ҙур вазифа өҫтәй. Бөтөн Башҡортостаныбыҙҙың киләсәк элитаһы - һеҙ. Шулай булғас, алған белемегеҙ, ҡиәфәтегеҙ, әхлағығыҙ менән дә, илебеҙ, халҡыбыҙ, телебеҙ өсөн эшләгән эштәрегеҙ, ҡорған ғаиләләрегеҙ, үҫтергән балаларығыҙ менән дә өлгө булырға, гимназист исеменә тап килергә тейешһегеҙ. Беҙ һеҙгә тик изге теләктәр генә теләйбеҙ һәм һеҙҙең иманлы, халҡыбыҙҙың иң ғәзиз кешеләре булыуығыҙҙы теләйбеҙ".

Традиция булараҡ, гимназияның "Аҡйондоҙ" бейеү ансамбле, "Гөлнәзирә" вокаль ансамбле, театр студияһы был көндә үҙенең "ветерандары" менән хушлашты. Был коллективтарҙа шөғөлләнеүселәр йыйылыусыларға үҙҙәренең сәләмен бейеү, йыр һәм шиғырҙар аша еткерҙе. Гимназия данын төрлө конкурстарҙа, олимпиадаларҙа яҡлаған уҡыу алдынғыларының Рәми Ғарипов бюсына сәскәләр һалыуы һәм шағирҙың "Туған тел" шиғырының хор менән яңғырауы сараға тағы ла үҙенсәлек өҫтәне.

Әйткәндәй, Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатын юҡҡа ғына кадрҙар һандалы тип атаманыҡ. Унын сығарылыш уҡыусылары 99 һәм унан да юғарыраҡ процент менән йыл һайын республика һәм Рәсәйҙең юғары уҡыу йорттарына уҡырға инә. Мәҫәлән, былтыр гимназияны 201 бала тамамлаһа, шуларҙың 147-һе - Башҡортостандың, 52-һе Рәсәйҙең юғары уҡыу йорттарына уҡырға ингән. Шуларҙың 173-ө - бюджет нигеҙендә, 28-е коммерция бүлектәрендә уҡый. Был уҡыу йортонда баш ҡаланың барлыҡ алдынғы вуздары менән килешеү төҙөлгән һәм балалар 10-11-се синыфтарҙа профиль йүнәлешендә белем ала. 11-се синыфта уларҙы вуз уҡытыусылары килеп уҡыта. Һөҙөмтәлә балалар барыһы ла тиерлек юғары һәм урта махсус уҡыу йорттары студенттары булып китә.

...Бала саҡ менән хушлашып күккә осоролған шарҙар, күгәрсендәр, һуңғы ҡыңғырауҙың һағышлы сыңы... Үҙҙәренең класына һуңғы дәрескә ингән сығарылыш синыфы уҡыусыларының күҙҙәрендә ысыҡ бөртөгөләй саф күҙ йәштәренең йылтырауы... Матур ҙа, һағышлы ла байрам. Ә уларҙың бала сағы, ысынлап та, мәктәп буйлап уларҙы ғүмер буйы эҙләп йөрөйәсәк, кисәге уҡыусылар йылдар үткәс тә бала саҡтарын эҙләп, туған мәктәптәренә киләсәк...

**Шәрифә САЛАУАТОВА.**

ЙӘШТӘР - ЙӘШТӘРСӘ

**Ошо көндәрҙә Башҡортостан Мәғарифты үҫтереү институтында 2013 йылда үткәрелгән республика олимпиадаларында еңеүсе уҡыусылар һәм уларҙың уҡытыусылары ҡатнашлығында "Башҡортостан өмөтө" республика форумы булып үтте. Башҡортостан Республикаһының мәғариф министры Әлфис Ғаязов ҡатнашыусыларға маҡтау ҡағыҙҙары һәм рәхмәт хаттары, шулай уҡ иҫтәлекле бүләктәр тапшырҙы, балаларға аҡ юлдар теләне. Ә беҙ, үҙ сиратыбыҙҙа, унда ҡатнашыусы балаларҙың донъяға, әйләнә-тирәләге хәлдәргә, мәғариф өлкәһендәге ҡайһы бер үҙгәрештәргә һәм заманыбыҙға ҡараштары менән ҡыҙыҡһындыҡ. Һүҙ - Сибай гимназия-интернатын тамамлаусы Әбйәлил районы Үтәгән ауылы һылыуы Гүзәл Солтановаға.**

# МИН ДӘ БАҪАМ...

## башҡорт телен яҡлаусылар рәтенә




- Бөгөнгө форумда ҡатнашыуым, башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса республика бәйгеһендә беренселеккә сығыуым менән уҡытыусым, журналист Әлнисә Рәхимйән ҡыҙы Кәримова-Алдырхановаға рәхмәтлемен. Һәр уҡытыусының уҡыусылар менән эшләүҙә үҙ ысулы була, шулай ҙа Әлнисә Рәхимйән ҡыҙы һымаҡ уҡытыусылар һирәктәр. Беҙҙе үҙ балалары кеүек яҡын күреүе, йыш ҡына шаяртып: "Был - минең бер туған уҡыусым", - тип таныштырырға яратыуы, башҡорт теле һәм әҙәбиәте кабинетына инеүсе уҡыусыларҙан тик башҡорт телендә генә аралашыу талап итеүе, дәрестәрендә һәр үткән темаға ярашлы рәүештә халыҡ ижадынын иң аҫыл гәүһәрҙәре өлгөһөндә тәрбиә бирергә тырышыуы ғына ла ошо хаҡта һөйләй. Әлнисә апайҙың ҡанаты аҫтында белем алыуым менән бәхетлемен. Киләсәктә уның юлын дауам итеп, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булырға, көсөмдө, алған белемемде күңеләмә яҡын өлкәне үҫтереүгә арнағым, яраткан уҡытыусымдың коллегаһы булғым килә.

Әле минең алда, миллионлаған тиҫтерҙәрем кеүек үк, бер маҡсат, бер һынау - Берҙәм дәүләт имтихандарын уңышлы тапшырыу тора. Ниндәй өлөш әләгер, ауырмы, еңелме - белмәйем, иллә мәғәр, иң яуаплы мәлдә юғалып ҡалмаҫмын, тип ышанам. Миненсә, һынауҙарҙы үткән саҡта алған белемеңдән, әҙерлегеңдән тыш, үҙ алдыңа ҡуйған маҡсаттарың тураһында уйланыу ҙа ярҙамға киләләр. Маҡсатлы кеше - үткер, үткен, сая һәм ынтылышлы була, ниндәй генә хәлдән дә сығыу яйын таба барыбер, йәғни үҙен-үҙе ыңғайға көйләй. Әлбиттә, маҡсаттың да төрлөһө бар - шәхси мәнфәғәттән сыҡҡаны һәм глобаль маҡсаттар. Иң тәүҙә ғаилән, артабан халҡың тураһында уйларға тейешһеңдер, миненсә. Бөгөн илебеҙ, телебеҙ, халҡыбыҙ ни хәлдә һуң? Шуныһы айырыуса ҡыуаныслы - күп кенә йәштәр бөгөн ошо һорауҙарға яуап эҙләй, бер-береһе менән был турала фекер алыша. Интернет мөмкинлектәре бөгөнгө йәштәрҙе "теш-тырнаҡлы" итте. Теләгән мәғлүмәтте табыу, дуҫтарың менән был турала хәбәрләшеү өсөн хәҙер алыҫ араларға хаттар яҙыу, хат килеүен көтөү йәки һәр факт артынан китапханаға "сабыу" талап ителмәй. Шулай ҙа, бар нәмәлә сама: йәйен - арба, ҡышын сана кәрәк; донъя селтәре ҡолона ла әйләнергә ярамай.

Ыңғай миҫал итеп атарлыҡ хәлдәрҙән тыш, күңелдә борсоғандары ла бар: мәҫәлән, ауылдарҙа мәктәптәрҙе оптималләштереү. Был процесс, ауылдарҙы юғалыуға дусар итеүҙән тыш, йәштәребеҙҙе, артабан - халҡыбыҙҙы ла, туған телебеҙҙән ситләштермәҫме икән, тип, һиҫкәнеп тә ҡуям ҡайһы саҡ. Һорауҙар күп, бындай һорауҙарға яуап таба алмаған милләттәштәр ҙә күп. Башҡорт телен һаҡлап, яҡлап йөрөүселәр рәтенә мин дә баҫам...

**Илгизәр БУЛАТОВ яҙып алды.**

# Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## БАЛАЛАР СӘЛӘМӘТЛЕГЕ

Үткән һанда маңҡалы балаларҙы дауалау тураһындағы һүҙемде тағы дауам итмәксемен. Йәшел йөҙөм йәки йәшел сейә, слива һутына бер нисә тамсы мумие ҡатнаштырып, баланың танауына тамыҙыу ҙа файҙалы. Был Әбүғәлисина рецепты. Мумие ҡатнаштырылған йәшел йөҙөм һуты ҡолаҡты ла һәйбәт таҙарта һәм сайырын иретеп сығара. Быны башта үҙегеҙгә эшләп ҡарағыҙ һәм был процедуранан һуң башығыҙҙы эстән йыуған һымаҡ булыуын тойорһоғоҙ. Балағыҙ аҡыллы, психик яҡтан сәләмәт булһын өсөн уның танауын бәләкәйҙән дауалағыҙ.

Шуны ла онотмағыҙ: маңҡалап йөрөгән баланың үпкәһенә лә бысраҡ үтеп инә һәм үпкә шешә. Ә бөгөн балаларҙа үпкә шешен һауыҡҡансы дауалай алмайҙар, ә туктаталар ғына. Етмәһә, дарыу ашатып, баланың бауырына һәм бөйөрҙәренә зыян килтерәбеҙ. Баланың үпкәһе шешеп, ауырый башлауы була, уға укол эшләй башлайбыҙ. Ә ауырыуҙы уколһыҙ ҙа дауаларға мөмкин. Арыш икмәге алырға һәм төрлө үләндәр, мәҫәлән, һары мәтрүшкә төнәтмәһе, ҡыҙыл сөгөлдөр (унда үпкә кәҙәнәктәре төҙәлеше өсөн кәрәк булған литий бар), бер аҙ бал, йод, бер йомортҡа һарыһы өҫтәргә. Һәйбәтләп болғатырға һәм йәймә эшләп, арҡаға, үпкә тапҡырына һалырға, компресс ҡағыҙы менән ҡапларға һәм бинт менән бәйләргә. Йәймәне 2-3 көн тоторға тырышырға. Малдың эс майын, бигерәк тә йөрәгенән алынған майҙы өҫтәү ҙә файҙалы. Мин спиртта иретелгән прополис өҫтәйем. Шулай итеп, баланы укол ҡаҙап ыҙалатыуҙың кәрәге юҡ. Оло кешене лә ошолай дауаларға мөмкин, тик йәймәне ҙурыраҡ итеп эшләргә кәрәк.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

## Шәкәр ҡомо

Төндәге йәрәхәткә әленән-әле шәкәр ҡомо һибеп торһаң, йәрәхәт тиҙ йүнәлә. Беҙ бала саҡта аҡ һалған күҙгә лә (кешенекенә лә, малдыҡына ла) бөркәләр ине.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✓ Ҡыҙған табаға ҡурғаш һалып иретәләр. Шунан баланың баш өҫтөндә һыу менән бергә һауыт тоталар ҙа ирегән ҡурғашты һалалар. Бала нимәнән ҡурҡҡан: эттәнме, бесәйҙәнме, шуның һүрәте төшә.



БАҠЫЙ БЫУАТ ЙОЛАҺЫ

# БАШҠОРТТАРҘЫҢ...
## дауалау һәм ҡурсалау магияһы

### Бүҫерле баланы имләү

**Бүҫер талау.** Ғ.Хисаметдинова бүҫер талау тураһында түбәндәгеләрҙе һөйләне: "Әүәле бала бүҫерле булһа, Заһира инәйем бүҫерҙе "талай" торғайны. Баланы йүргәккә генә төрөп, уға тоттора инек. Заһира инәйем шул йүргәк аша ауыҙы менән баланың эсенә тейеп-тейеп ала ине. "Талаған" саҡта ул эт кеүек ырылдай, әллә ниндәй доғалар ҙа уҡый торғайны".

**Аятел көрси яҙып эсереү.** Урта Урал башҡорттары баланың бүҫере булһа, сынаяк аҫтына көмөш ҡара, ҡарағат, елək һыуы менән "Аятел көрси" яҙып эсерәләр ине. Бүҫере бөтә, тиҙәр.

**Бүҫер әпсене.** Илеш башҡорттары тоҙло һыуҙы ошондай әпсен менән өшкөрөп, балаға бөрккәндәр:

Аҡ болот ҡырында аҡ тәкә,
Күк болот ҡырында күк тәкә,
Ҡара болот ҡырында ҡара тәкә.
Мөгөҙләре күктә, ҡойроғо ерҙә.
Уларның эсен ҡасан бүҫер ашаса,
Шул саҡта был балаға бүҫер йәбешкән.

### Ҡурҡҡан баланы имләү

Бала нимәнәндер ҡурҡһа, ул илай ҙа илай. Һиҫкәнә, һаташа, илағанда, ҡалтырана. Бындай баланы, ҡото осҡан, тип имләйҙәр. Осҡан ҡотто ҡайтарыу төрлөсә башҡарыла.

**Ҡот ҡайтарыу йолалары.** Бала нимәнәндер ҡурҡһа, уның ҡото осоп китә, тиҙәр. Ҡото осҡан бала, ғәҙәттә, илай, мыжый, ҡалтырана, аяҡтан ҡала, хәлһеҙләнә, йөҙөнә ҡыу төҫө инә. Ҡотон ҡайтармаһаң, ул ауырып үлә, тиҙәр. Осҡан ҡотто ҡайтарыр өсөн "Ҡот ҡойоу" йолаһы үткәрәләр. Ҡайһы бер яҡтарҙа был йоланы "Ҡот ҡайтарыу", "Ҡотайтыу" тип тә йөрөтәләр.

Ҡот ҡойоу ике маҡсат менән үткәрелә. Беренсенән, ҡот ҡойоп, баланың нимәнән ҡурҡҡаны билдәләнә, йәғни диагноз ҡуйыла. Икенсенән, осоп киткән ҡотто ҡайтарыу маҡсаты атҡарыла.

**Ҡот ҡойоу.** Шишмә районы башҡорттарында йола түбәндәгесә башҡарыла. Баланың өҫтөнә сепрәк ябыла. Шунан утта ҡот сүмесен йәки табаны ҡыҙҙыралар. Ҡыҙған табаға ҡурғаш һалып иретәләр. Шунан баланың баш өҫтөндә һыу менән бергә һауыт тоталар ҙа ирегән ҡурғашты һалалар. Бала нимәнән ҡурҡҡан: эттәнме, бесәйҙәнме, шуның һүрәте төшә. Бала ҡурҡһа, элек әбейҙәр шулай эшләйҙәр ине.

Нимәнән ҡурҡҡанын билдәләгәс, ҡотто ҡайтарыу башлана. Быны өсөн ҡурғаш йөрәк формаһын алғансы ҡоялар. Йөрәк формаһын алғас, "Ҡот урыныңа ултырған, ҡайтҡан", тиҙәр.

**Ҡот һауыты.** Төшкән ҡотто күн йә ҡалын ҡара сепрәктән өскөл итеп тегелгән тоҡсайға һалып, ауырыуҙың муйынына тағалар.

Шишмә районы Биккол ауылынан М.Сәлимйәнова ҡот һауыты тураһында былай тип һөйләне: "Шул ҡурғашты бер күн нәмәгә тегеп, тоҡсай һымаҡ итеп, баланың муйынына тағып ебәрәһең. Нисә көнгә таҡкандарҙыр, уныһын белмәйем. Күн эсенә һалып, бетеү итеп, өскөлләп тегеп ҡуялар ине".

**Ҡот төйнәү.** Учалы яҡтарында ҡотто түшәктең, яҫтыҡтың бер еренә төйнәп һалып ҡуйыу ҙа таралған.

**Ҡот һыуы.** Иретелгән ҡурғаш һалынған һыуҙы ҡот һыуы тиҙәр. Ул да балаға бик файҙалы икән. Ҡот һыуы менән: "Име-томо шул булһын", - тип, баланың битен, ҡулын, башын йыуалар, өс йотомон эсерәләр.

**Фирҙәүес ХИСАМИТДИНОВА.**
(Дауамы бар).

АФАРИН!

# ҺУҢҒЫ ҠЫҢҒЫРАУ БАЙРАМЫ...



## 20-се ҡала башҡорт гимназияһында



**Берҙәй күңелле лә, моңһоу ҙа был байрам Ф. Мостафина исемендәге 20-се ҡала башҡорт гимназияһында ла үтте. Быйылғы уҡыу йылында был белем усағын 61 уҡыусы тамамлай, 6 уҡыусы алтын һәм көмөш миҙалға дәғүә итә. Былтыр гимназияны 52 уҡыусы тамамлаған, уларҙың 95 проценты юғары уҡыу йорттарына уҡырға ингән.**

"Әле беҙҙең шундай матур мәлебеҙ, һөнәр һайлайбыҙ, теләктәребеҙҙе тормошҡа ашырабыҙ, үҙебеҙ йәш, дәртле, ҡулыбыҙҙан килмәгән эш юҡ", - тигәйне иң алдынғы, әүҙем уҡыусыларҙың береһе Данил Ғофранов әңгәмәләшкән ваҡытта. Ысынлап та, сығарылыш уҡыусыһы өсөн оло тормош юлына аяҡ баҫҡан ваҡыттан да күркәмерәк мәл бармы һуң ул? Алда дәүләт имтихандарын тапшырыу, юғары уҡыу йортона уҡырға инеү кеүек мәшәҡәттәр ҙә уларҙың байрамса кәйефен боҙа алманы.

Киләсәктә артист һөнәре нескәлектәренә төшөнөү өсөн Өфө дәүләт сәнғәт академияһын һайлаған егетебеҙ үҙенең класында иң шуҡ һәм шаян уҡыусылар йыйылған булыуы сәбәпле, уҡыу йылдары бик күңелле осор булып хәтерҙә ҡалыуын билдәләне. Ғөмүмән, был класта уҡыусыларҙың һәр береһен ижади кеше тип атап була, мәҫәлән, Азамат Байгилдин менән Линур Бикбулатовтың үҙенең роктөркөмө бар, Адель Бакированы ла йәштәр йырсы, фотограф тип белә. Йәлил Ғарипов йырлай ҙа, шәп спортсы ла. Шулай ҙа уларҙың күбеһе инженер, нефтсе, юрист, иҡтисадсы, тәржемәсе һөнәрен һайлаясаҡ, Өфөнөң юғары уҡыу йорттарынан тыш, Мәскәү, Ҡаҙан вуздарын яуларға уйҙары бар.

"Гимназиям миңә яҡын дуҫтар табырға ярҙам итте, бер парта артында ултырып белем алған Артур Шәйәхмәтов менән бер туғанға әйләнеп бөттөк. Шулай ҙа иң һағындырғаны - уҡытыусылар булыр инде. Класс етәксебеҙ Тәнзилә Яҡуп ҡыҙы Бикбаева фән уҡытыусыһы ғына түгел, тормошҡа өйрәтеүсе оло мөғәллимә булды, уларҙың һәр береһенә ҙур рәхмәт", - ти Данил хәтирәләре менән уртаҡлашып. Әйткәндәй, ул үҙе лә көмөш миҙалға дәғүә итә, бының өсөн йәш егеткә Берҙәм дәүләт имтихандарын яҡшы билдәләргә тапшырырға кәрәк буласаҡ.

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

## ...Республика иҡтисад лицей-интернатында





**Егеттәр һәм ҡыҙҙар айырым белем алған уҡыу йорто - Республика иҡтисад лицей-интернатында юғары синыф уҡыусылары физика-математика, социаль-иҡтисади һәм иҡтисад кластарына буленеп уҡый. Шуға күрә уларҙың нәҡ ошо йүнәлештә белем биргән юғары уҡыу йорттарын һайлауҙарына аптырайһы түгел. Директорҙың уҡытыу-тәрбиә эштәре буйынса урынбаҫары Асия Шәрифйән ҡыҙы белдереүенсә, мәҫәлән, былтырғы сығарылыштың 98 проценты бөгөнгө көндә студенттар рәтендә һәм уларҙың күбеһе республиканың Өфө дәүләт нефть техник, Өфө дәүләт авиация техник, Башҡорт дәүләт университеттарында һәм шулай уҡ Рәсәйҙең башҡа ҡалаларында белем ала. Быйыл лицейҙы тамамлаусы 82 уҡыусының да маҡсаттары ошондай мәртәбәле уҡыу йорттарына уҡырға инеү. Әйтергә кәрәк, улар араһында 12 уҡыусы миҙалға дәғүә итә.**

**Урал Баҡаев, Күмертау ҡалаһынан:** Лицейҙа уҡыған ваҡытымды һәр саҡ һағыныу һәм ихтирам тойғоһо менән иҫкә аласаҡмын. Икенсе тыуған йортома әйләнгән был белем усағы миңә киләсәккә ҡыйыу аҙымдар менән барырға ҡанат ҡуйҙы, ҡуйған маҡсаттарыма ынтылыу өсөн ышаныс бирҙе. Юғары белемде Өфөлә йәки Санкт-Петербургта алырға ниәтләйем. Киләсәктә үҙемде иҡтисадсы итеп күрәм һәм ошо юҫыҡта юғары унышҭарға өлгәшеү өсөн тырышасаҡмын. Етмәнә, был маҡсатҡа өлгәшеү өсөн ныҡлы һәм төплө нигеҙҙе лицей бирҙе лә инде, артабан барыһы ла тик үҙемдән тора.

**Таһир Нуриәхмәтов, Шишмә районынан, лицейҙы алтын миҙалға тамамлаусы:** Мәктәпкә уҡырға барғас та мин ҙур ҡалала белем алыу хаҡында хыялландым. Минең был теләгемә атай-әсәйем ҡаршы килмәне һәм 7 синыфҡа ошо лицейға уҡырға алып килде. Был дөрөҫ ҡарар булды, сөнки мин бында төплө белем генә алып ҡалманым, ә ышаныслы дуҫтар таптым, үҙаллылыҡҡа өйрәндем. Ғөмүмән, башҡа мәктәптә уҡыуымды күҙ алдына ла килтермәйем, лицей минең өсөн идеаль уҡыу йорто. Артабан уҡыуымды Өфөнөң бергә юғары уҡыу йортонда йә Мәскәү дәүләт халыҡ-ара мөнәсәбәттәр институтында дауам итергә уйлайым. Киләсәктә тыуған республикам өсөн файҙалы һәм кәрәкле белгес булырмын, тип ышанам.

**Наҙгөл САФИУЛЛИНА.**

ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

# КҮПТЕ КҮРГӘН, КҮПТЕ КИСЕРГӘН...

## йәғни Башҡорт тарихының ҡайһы бер биттәрен барлау

Әйтергә кәрәк, был хәлдәрҙән һуң да бик күп ойоштороу саралары үткәреү, матди ҡыҙыҡһындырыу, ыңғайламағандарҙы өҙлөкһөҙ ҡурҡытыу, янау, эҙәрлекләүҙәр арҡаһында, Батша йәнәптәре менән урыҫ сиркәүе әһелдәре берлектә халыҡтарҙы суҡындырыуҙа байтаҡ уңыштарға өлгәшә. Һөҙөмтәлә, 33 йыл дауамында ғәмәлдә булған манифест ярҙамында 384 мең 226 кеше православие динен ҡабул итә. Улар араһында күпселекте удмурт, сыуаш, мари, мордва халҡы һәм татарҙарҙың бер өлөшө тәшкил итә.

Сиркәүҙәр отчеттарынан күренеүенсә, суҡыныусылар арһында башҡорттар бик һирәк теркәлгән. Әлбиттә, иң алдан етешһеҙ, хатта аслытуҡлы тормошта йәшәгәндәрҙе алдаштырып, ҡыҙыҡтырып, суҡындыралар. Ул бахырҙар араһында, юрый ғына динен алыштырған булып, сиркәүҙең аҡса, бүләк, һыйыр, кәзәһен алғас, үҙ динемде тотормон тип уйлағандар ҙа була. Ләкин, кешеләрҙең бер-береһен күҙәтеү, һатыу, хыянатлыҡтары ла аҡсаға ойошторолғас, күптәре тиҙ фашланып, язаға тарттырыла. Архив материалдарынан күренеүенсә, башҡаларҙы ҡурҡытып, хәйләле ниәттәренән дүндереү өсөн, ҡайһы бер ауылдарҙа сиркәүҙе алдарға маташҡандарҙы яңғыҙ йәиһә бөтә ғаиләһе менән утта яндырыу осраҡтары ла теркәлгән...

Аҫаба башҡорттар суҡындырылыуҙан ҡасып килеүсе мосолмандарҙы үҙ яндарына һыйындырып, ерҙәрен бүлешеү менән бер рәттән, батшалыҡ мәғдәнгә бай башҡорт ерҙәрен үҙләштереүгә урыҫ һәм сит ил эшҡыуарҙарын йәлеп итеп, уларҙы һәм керәшендәрҙе ғаиләләре менән күсерә башлай. Мәғдән сығарыу эштәре алып барылған ерҙәр башҡорт ырыуҙарынан тәүҙәрәк тәңкәгә, тингә (хатта әсмүхә сәйгә) һатып алынһа, тора-бара, заводчиктар тарафынан оятһыҙ рәүештә үҙ белдектәре менән баҫып алына. Һөҙөмтәлә, ырыуҙар көтөүлек, сәсеүлек, бесәнлектәренән яҙа. Башҡорт ерҙәренең арзан ғына һатылыуы һәм яуыздарса тартып алыныуына халыҡ телендә һаҡланған риүәйәттәр, бәйеттәр ҙә дәлил. Әйткәндәрҙе иҫбатлап һәм ул замандың һәйкәлдәре булып, аҫаба башҡорт ерҙәрендә шул дәүерҙә күсеп килеп тамырланған урыҫ, татар һ.б. халыҡтарҙың нәҫелдәре йәшәгән ауылдар тора. Мәҫәлән, Баймаҡ районының бөрйән ырыуы ерҙәрендә Юлыҡ, Бикеш, Казанка, Богачевка, Семен, Крепостной Йылайыр ауылдары хәҙер ҙә бар. Күптәре юҡҡа сыҡҡан да инде...

Рәсәй батшалығының халыҡты йәберләү, динде ҡыҫырыҡлау, ерҙе талауҙағы был ҡырағайлыҡтарына ҡаршы 1773-1775 йылдарҙағы Салауат Юлаев менән Е.Пугачев етәкләгән ғәскәрҙең өстән бер өлөшөн башҡорттар тәшкил итә. Был иреклелек, ғәҙеллек даулаған ихтилал аяуһыҙ ҡанға батырыла. Милләтебеҙҙең аҫыл улдары күпләп ҡырыла. Ул турала тарих биттәрендә һәм башҡа төрлө сығанаҡтарҙа яҙа-йоҙа булһа ла яҙылған...

Башҡорттарҙы башҡа баш күтәрә алмаҫлыҡ хәлдә ҡалдырыу маҡсатында, халыҡты бер-береһенә ҡаршы ҡуйып, берҙәмлегенән яҙҙырыу, тарҡатыу һәм даими күҙәтеү аҫтында тотоу өсөн 1798 йылда Башҡортостан ерҙәре кантондарға бүленеп, халҡы хәрби сословиеға күсерелә. 17 йәше тулған ир-егеттәрҙе 25 йылға хәрби хеҙмәткә йәлеп итеп, Рәсәй алып барған һуғыштарҙа ҡырылыуға дусар итеү сәйәсәте 1865 йылға тиклем ғәмәлдә була. "Урыҫ батшаһы ерҙәрен тартып ала башлауы башҡорттарҙа ныҡ ризаһыҙлыҡ тыуҙыра. Ризаһыҙлыҡ асыҡтан-асыҡ нәфрәткә әүерелә. Башҡорт күтәрелештәре бер һүрелә биреп, бер көсәйеп, 1837 йылға тиклем дауам итә. Урыҫтың 300 йыллыҡ хакимлығы осоронда уға ҡаршы 76 баш күтәреү була" (Муса Мортазин).

Һығымталар:

1. Ерҙәр баҫылып алыныу арҡаһында сәсеүлек, бесәнлек, көтөүлектәр майҙаны кәмеүе халыҡтың төп йәшәү сығанағы - аҙыҡ-түлеккә мохтажлыҡ тыуҙыра, тимәк, һан яғынан үҫешен сикләй, милләт мөсһөҙләнә, көсһөҙләнә.

2. Мәғдәнселектең аҫаба халыҡҡа бер ниндәй матди, ғәмәли файҙаһы теймәй, ерҙәрҙе тәләфләүгә, милли байлыҡты исрафлауға килтерә.

3. Башҡа халыҡтарҙы күпләп күсереп ултыртыу, урындағы халыҡты тәбиғи булмаған йәшәү рәүешенә, ят дингә күндереп маташыу милләттең берҙәмлеген ҡаҡшата, үҙ мөхитендә йәшәү, үҫешеү мөмкинлеген сикләй, тәбиғи йәшәү сығанаҡтарын бүлешергә мәжбүр итә.

4. Ир-егеттәрҙе оҙайлы хәрби хеҙмәткә алыу уларға йәш ваҡытында ғаилә ҡороп, нәҫеленең һау-сәләмәт тоҡомон арттырыуға, затын көсәйтеүгә ҡамасаулай.

5. Тәбиғи байлыҡтарын аяуһыҙ талауға ҡарамай, өҫтәмә көс еткеһеҙ һалымдар түләүгә мәжбүр итеү халыҡты мохтажлыҡта йәшәргә дусар итә. Ас-яланғас халыҡтың һаулығы ҡаҡшай, ғүмере ҡыҫҡара, ул үҙенә һау-сәләмәт алмаш тоҡом ҡалдыра алмай.

6. Был ғәҙелһеҙлек, аяуһыҙлыҡ, башбаштаҡлыҡ халыҡта ризаһыҙлыҡ, нәфрәт тыуҙыра һәм сираттағы баш күтәреүгә килтерә. Әлбиттә, ихтилал ҡанға батырылып баҫтырыла, күп кеше ҡырыла, ҡоллоҡҡа һатыла, ауылдар, ерҙәр яндырыла, мал-мөлкәт талап алына, хоҡуҡтары тағы ла ҡатыраҡ сикләнгән башҡорттар фәҡирлеккә дусар ителеп, ҡаршылаша алмаҫлыҡ өмөтһөҙләндерелә. Ләкин власть тарафынан баҫыу, ҡыҫырыҡлау, иҙеүҙәр дауам итеүе һөҙөмтәһендә тарих ҡабатлана...

Башҡорттарҙың 1557 йылда Рәсәйгә ҡушылғандан һуңғы 300 йылда башҡорт халҡы кисергән фажиғәле ваҡиғаларҙы барлау ошо һығымталарға килтерә. XX быуаттың 20-се йылдарында башҡа халыҡтар менән тиң хоҡуҡлылыҡты, үҙаллы үҫешкә асылған киң мөмкинлектәрҙе, мәғрифәттә, мәҙәниәттә, фәндә, сәнәғәттә һ.б. өлкәләрҙә байтаҡ уңыштарға өлгәшһәк тә, тулыһынса файҙалана алманыҡ. Сөнки быуындарҙан-быуынға баҫылып, тыйылып, иҙелеп, сикләнеп йәшәүгә мәжбүр ителгән һәм күндерелгән милләттең тоҡомдары ла йыуаш, баҫалҡы, күндәм...

1917 йылдағы Октябрь революцияһынан һуң, Рәсәй дәүләте федерация булып формалашҡан осорҙа, уның мәмләкәтенә ингән республика, өлкә, крайҙарҙың сиктәрен асыҡлау һәм билдәләү ихтыяжы тыуа. Юғары дәүләт органдары күрһәтмәләрен ашығыс үтәү сараһы булғанлыҡтан, был эштәргә урындағы хакимиәттәр тарафынан артыҡ иғтибар һәм әһәмиәт бирелмәй, тип аңларға була. Сөнки ғәмһеҙ атҡарылған эштәр һөҙөмтәһендә, Башҡортостан ерҙәре иҫәбенә күрше республика, өлкәләрҙең ерҙәре киңәйтелә. Мәҫәлән, Татарстанға Минзәлә, Бөгөлмә, Аҙнаҡай һ.б. төбәктәрҙәге 200 мендән ашыу аҫаба халыҡ йәшәгән башҡорт ерҙәре ҡушыла. Шулай уҡ Удмурт республикаһы, Пермь, Силәбе, Свердловск, Ырымбур өлкәләренә 50-100-әр мең башҡорт йәшәгән Башҡортостан ерҙәре бүлеп бирелә. Тимәк, шул осорҙа ғына 500 мендән артыҡ башҡорт еренән, иленән, милләтенән айырылып, аңлы рәүештә ассимиляцияға дусар ителә. 2002 йылда халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәренән күреүебеҙсә, ул ерҙәрҙә үҙҙәрен башҡорт тип таныуғандар бик аҙ.

Үкенескә күрә, бөгөн дә, боронғо замандарҙағы кеүек үк, еребеҙ тәләфләнә, тәбиғи ресурстар, ер аҫты, ер өҫтө байлыҡтары тулыһынса урындағы халыҡ мәнфәғәтенә файҙаланылмай. Бөгөн дә сит-яттар еребеҙҙә соҡона, урмандарҙы ҡырҡа, йылғаларҙы бысрата. Рәсәй дәүләтенең донорҙары сафында булыуға ҡарамаҫтан, Башҡортостанға сәнәғәт тармаҡтарын үҫтереүгә, йәшәү шарттарын камиллаштырыуға, социаль өлкәләге мохтажлыҡты бөтөрөүгә төп сығанаҡтар "үҙәктән" ҡыҫып, ҡыҙғанып бүленеүе һөҙөмтәһендә, алға киң аҙымдар яһар аяҡтар тышаулы. Эйе, хәҙер аяҡ-ҡулдарҙа сынйырҙар юҡ: иркен донъя гиҙеү, белем алыу, һөнәр һайлау мөмкинлектәре бар, ләкин күҙгә күренмәгән аҫтыртын сикләүҙәр һәм асыҡтан-асыҡ ҡоролған сиктәр ашаҡланһа, елкәләге ҡороҡ муйынды ҡыҫа...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Динен, илен, телен, аҫабалыҡ хоҡуҡтарын яҡлап, ғәзиз ғүмерҙәрен аямай көрәшкән милләтебеҙҙең оло йөрәкле, сая, ҡаһарман улдарын иҫкә алып, дан йырлау, бөгөнгө тормошобоҙҙо заман талаптарына лайыҡлы кимәлгә күтәреп, киләсәккә яҡшы һәм ышаныслы нигеҙҙәр ҡороп йәшәү - мөҡәддәс бурысыбыҙ! Үткәндәрен белмәгән, бөгөнгөһөн ҡәҙерләмәгән, киләсәген хәстәрләмәгән халыҡтың иртәгәһе хәүефле!..**

**Урал МОСТАФИН.**

**(Аҙағы. Башы 21-се һанда).**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Һунарсылыҡ, ҡошсолоҡ һәм балыҡсылыҡ

Ҡышҡылыҡҡа ҡорттарҙы баҙға йәки махсус төҙөлгән ярым ер өйгә урынлаштырғандар. Ҡалын һәм ныҡлы умарталар умарталыҡта ҡышлауға ла ҡалдырылған. Баҙҙарҙың насар ҡоролошо һәм ҡорттарға даими тәрбиә булмау йыш ҡына уларҙың ҡышын күпләп үлеүенә килтергән. Умарталар бары тик яҙын, улар утарға сығарылғас ҡына ҡаралған. Уларҙа бал запасы наҡыҫлаһа, бал ҡорттарын өҫтәмә туҡландырғандар. Уларға иҫке бал йәки һыуҙа иретелгән бал, шәкәр иретмәһе биргәндәр. Бал ҡорттары ҡуйылған шыйыҡлыҡҡа батып үлмәһен өсөн уларҙың өҫтөнә бер аҙ һалам һалғандар.

Умарталыҡта башҡорттар һирәк кенә ҡыуыш һәм таҡта аласыҡ ҡорған, бик йыш ҡарауылсы йәшәгән һәм умартасылыҡ өсөн кәрәк булған ҡорамалдар ҡуйылған йорт төҙөгәндәр. Умарталыҡтар һәр ваҡыт ат башы һөлдәһе ултыртылған ситәндәр менән кәртәләп алынған. Ат башы һөлдәләре күҙ тейеүҙән һаҡлаған һәм шулай уҡ айырым умарталарға һалынған, ағастарға элеп ҡуйылған.

Айырым умарталыҡтарҙы ҡороу һәм уларҙы тотоу сығымдар талап иткән. Шуға күрә умарталары аҙ булған башҡорттар уларҙы баҡсаларында, йорт алдарында йәки йорт ихаталарында тотҡан (һүрәт).



Һуңғылары тотош Башҡортостан буйынса, бигерәк тә саф һыулы йылғалар буйында урынлашҡан ауылдарҙа, күҙәтелгән.

Малсылыҡ кәм тигәндә беҙҙең эраға тиклем II мең йыллыҡтың икенсе яртыһынан алып Башҡортостан халҡының төп шөғөлө булған. Ауылдарҙа (Баламбаш һ.б.) йорт атының, һыйырҙың, сусҡаның, һарыҡтың һәм кәзәнең һөйәктәре табыла. Был ултыраҡ малсылыҡ күрһәткесе. Шуны уҡ беҙҙең эраның II мең йыллыҡтың һуңында һәм I мең йыллыҡтың беренсе тәүге йөҙ йыллыҡтарындағы малсылыҡ тураһында ла әйтергә мөмкин; скифтар заманында Евразия далалары халҡы малды күпләп үрсетеп, күсмә малсылыҡҡа күсә. Был ваҡытта Башҡортостан халҡы, уның көньяҡ һәм көнбайыш Урал аръяғы ялан районларынан тыш (Ананьин мәҙәниәте ваҡыты), ултыраҡ көтөү малсылығы менән шөғөлләнеүен дауам иткән. Сармат, һунн һәм артабанғы дәүерҙәрҙә, скифтар ваҡытындағы кеүек үк, күсмә малсылыҡ ялан Башҡортостанында ғына йәшәгән. Урман-ялан районларында ул ярым күсмә көтөү малсылығы төрөндә булған.

Әйтелгәндәрҙән шундай һығымта яһарға мөмкин: **барлыҡ башҡорттарҙың бары тик күсмә тормош алып барыуы тураһындағы ғына күҙаллауҙар - хата. Малдарҙың йыл һуҙымында аяҡ аҫтындағы үлән менән туҡланып йөрөгән күсмә малсылығы сағыштырмаса һуңыраҡ, беҙҙең эраға тиклем I мең йыллыҡтың тәүге өстән беренсе өлөшөндә барлыҡҡа килгән һәм һуңынан Башҡортостандың тотош территорияһына таралмаған. Өҫтәүенә, башҡорттар бер урында ла таҙа күсмә халыҡ булмаған, хатта ялан районларында ла ярым күсмә тормош алып барған, тип күҙалларға барлыҡ нигеҙ бар.**

Башҡортостандың күпереп үлән үҫкән болондары һәм ҡуйы үләнле көтөүлектәре булған иркен ерҙәре малсылыҡты үҫтереү мөмкинлеге биргән. Башҡорттар, хужалыҡтарының нигеҙе итеп булмаһа ла, төп элементтарының береһе итеп, ә ялан районларында хатта нигеҙ итеп, бик күп мал тотҡан.

*✓ Иң һәйбәт һөнәр - ул президент тип уйлайым. Эше ауыр инде уның, төрлө закондар уйлап сығарырға кәрәк. Иң мөһиме, президент һаран булмаҫҡа һәм кемгәлер ҡыйын булһа, ярҙам итергә тейеш.*

# БӘХЕТЛЕ БУЛЫР ӨСӨН...

## күп тә кәрәкмәй икән шул

**Үҙ милли асылында ғына кеше балҡый, бәхетле була ала. Шуға ла бөгөн балалар ҡорона ошондай бәхетле балаларҙы - "Тамыр" балалар студияһы тәрбиләнәүселәре Салауат Әбделвәлиев, Айсель Атауллина, Зөлхизә Әйүпова, Алсын менән Сыңғыҙ Солтанморатовтарҙы саҡырҙыҡ. Бәхетле бала саҡ ниндәй була? Балаларҙы нимәнән һәм кемдән һаҡларға кәрәк? Әңгәмәбеҙ ошолар һәм башҡорт балаларына төрлө яҡлап камиллашырға мөмкинлек биргән "Тамыр" студияһы тураһында.**



**▸ Һеҙ барығыҙ ҙа "Тамыр" студияһында "эшләйһегеҙ" бит инде. Тамашасы һеҙҙе ниндәй тапшырыуҙар аша таный белә?**

**Салауат:** Дүрт йәштән "Тамыр"ға йөрөйөм, әле "Ә, Ю, Я ҡаласығы" тапшырыуында ҡатнашам, унда беҙ телевизор ҡараусы балаларға өндәрҙе өйрәтәбеҙ. Өндәрҙең нимә икәнен яҡшы беләм, сөнки Ф. Мостафина исемендәге 20-се ҡала башҡорт гимназияһында беренсе класты тамамланым.

**Сыңғыҙ:** Беҙ ҙә бәләкәйҙән төрлө тапшырыуҙарға ҡатнашабыҙ, "Портрет" тип аталғаны - иң оҡшағаны. Унда рәхәтләнеп һүрәт төшөрәһең, ҙур апай-ағайҙарға ҡыҙыҡлы һорауҙар бирәһең. Уларҙың ҡыҙыҡлы яуаптары ла оҡшай миңә.

**Алсын:** "Портрет"ты төшөргәндә тапшырыуҙы әҙерләүсе апайҙар беҙгә геройға биреләсәк һорауҙарҙы өләшеп сыға сығыуға, ләкин ул һорауҙар бөтһә, үҙебеҙ уйлап сығарып һорауҙар бирәбеҙ. Һорау уйлап сығарыуы ауыр түгел, мин күберәк Йыһан тураһында һорайым, сөнки Йыһанға осорға теләйем.

**Зөлхизә:** Мин "Тамыр"ҙың йыр түңәрәгенә йөрөйөм, "Әкиәт китабы" тапшырыуында ҡатнашам. Әкиәттәрҙе яратам, үҙем дә һөйләйем, былтыр баш ҡалала үткән әкиәт һөйләүселәр бәйгеһендә ҡатнаштым. Унда беренсе урын яуланым, әкиәттең исемен онотҡанмын инде, кәзә тураһында ине ул. Ул бәйгелә алған дипломымды стенаға элеп ҡуйҙыҡ. Тағы ла йомшаҡ айыу бүләк иткәйнеләр, атайым шуны иҙәнгә ултырта ла ҡуя, бысранып ҡына бөтә инде аҡ айыуым!

**Айсель:** Мин дә йырларға яратам, төрлө концерттарҙа ҡатнашам. "Тамыр"ҙа йөрөү миңә лә бик оҡшай.

**▸ Үҙ туған телегеҙҙә һөйләшеү, тиҫтерҙәрегеҙ менән аралашыу оҡшайҙыр, шулай бит? "Тамыр"ҙы тағы нимә өсөн ятатаһығыҙ?**

**Айсель:** Тапшырыуҙарҙа ҡатнашыу оҡшай ул оҡшауға, тик арыта. Ҡышҡы әкиәт төшөргәндә өйгә төнгө ун икелә ҡайта торғайныҡ. Аҙаҡ был йонсоуҙар онотола, "Тамыр"ға саҡ ҡына саҡырмай торһалар, нимәлер етмәгән кеүек тойола. Малайҙар, ҡыҙҙар менән дуҫлашып бөткәнбеҙ. Хәҙер инде өлкән төркөмгә күсергә йөрөйбөҙ.

**Алсын:** Ысынлап та, нык арыта. Ҡайһы берҙә кис етеп тә өлгөрмәй, диванға ятып йоҡлап китәм. Шулай ҙа бында хәтәр күңелле, бергәләп рәсем төшөрөүе ҡыҙыҡ. Мин ҙурайғас, моғайын, рәссам булырмын ул. Бәлки, летчик та булырмын әле, сөнки һауанан ерҙе күреүе үҙе бер мөғжизә бит. Космонавт, янғын һүндереүсе һөнәре лә оҡшай, әлегә кем булырымды белмәйем, әммә иң һәйбәт һөнәр - ул президент тип уйлайым. Эше ауыр инде уның, төрлө закондар уйлап сығарырға, ил менән идара итергә кәрәк, арытыралыр инде. Иң мөһиме, президент һаран булмаҫҡа һәм кемгәлер ҡыйын булһа, ярҙам итергә тейеш. Илде һаҡларға ла бурыслы ул. Алла һаҡлаһын, илде дошмандар баҫып алһа? Рәсәй беҙҙең ил, беҙ унда тыуғанбыҙ, шуға ла беҙ бөтәбеҙ ҙә уны һаҡларға тейеш.

**Салауат:** Миңә иң оҡшағаны - "Тамыр"ҙан хеҙмәт хаҡы алыу. Бына өлкәндәр аҡсаны эшкә йөрөп ала бит, беҙ ҙә өлкәндәр кеүек булып сығабыҙ инде. "Тамыр"ҙан алған аҡсамды йыйып, сенсорлы телефон һатып алдым, әле тағы йыям.

**Зөлхизә:** Бында бар балалар ҙа матур итеп кейенә, сәстәрҙе лә матур итеп үреп йөрөтәбеҙ. Башҡортса ғына һөйләшәбеҙ, көләбеҙ, шаярып алырға ла ярай.

**Сыңғыҙ:** Өйҙә лә башҡортса һөйләшәбеҙ, ә бына мәктәптә русса аралашабыҙ. Сөнки унда бөтәһе лә башҡортса белмәй шул.

**Салауат:** Ә беҙ мәктәптә төрлө телдә һөйләшәбеҙ, рус теле дәресендә - русса, әлифба менән математика дәресендә - башҡортса.

**Алсын:** Шулай ҙа, минең уйлауымса, башҡорт телендә һөйләшеү барыбер һәйбәтерәк, сөнки ул минең туған телем, әсәйемдең, атайымдың теле. Русса өйрәнеүе еңел генә ул, ә бына башҡортса һөйләшеүе әҙерәк кенә ауыр. Класта кем башҡортса аңлай, әммә һөйләшә белмәй, уларға башҡортса һөйләшергә өйрәтәбеҙ. Башҡаларҙы һөйләшергә өйрәтеү миңә бик оҡшай.

**▸ Өләсәй-олатайҙарығыҙ, туғандарығыҙ һеҙҙе телевизорҙан күреп, маҡтаймы? Башҡаларға оҡшағас, һеҙгә рәхәт буламы?**

**Алсын:** Шатлана барыһы ла. "Беҙ һине телевизорҙан күрҙек", тиҙәр. "Йондоҙ" тип шаярталар. Маҡтауҙы бар кешеләр ҙә яраталыр ул.

**Сыңғыҙ:** "Маладис, тағы ла тапшырыуҙарҙа ҡатнаш", тиҙәр туғандар. Сәлимә һеңлем беҙҙе таный һалып ала ла, Алсын ағай, Сыңғыҙ ағай, килә һалығыҙ, тип, беҙҙе телевизор алдына саҡыра. Беҙ, ярай, ярай, тип кенә ҡуябыҙ.

**Айсель:** Өләсәйемә мин төшкән бөтөн тапшырыуҙар оҡшай, сөнки мин унда бик матурмын. Урамда кешеләр таный. Нык шатланам, эстән рәхәт була.

**Зөлхизә:** Урамда таныйҙар ҙа, миңә ҡарап йылмаялар. Мин дә йылмаям, күңелле булып китә. Өләсәй-олатайҙар, маладис, тиҙәр, арҡанан яратып ҡына торалар. Телевизорҙан үҙемде күреү миңә лә оҡшай.

**Салауат:** Миңә туғандарым бер нәмә лә әйтмәй ул. Мәктәптә лә, һине телевизорҙан күрҙек, тиҙәр ҙә, башҡа бер нәмә лә өндәшмәйҙәр. Өйрәнеп бөткәндәрҙер инде. Мин дә үҙемде телевизорҙан күреп ҡалһам, бер ҙә аптырамайым.

**▸ Әгәр ҙә үҙегеҙгә, әйтәйек, бәхет тураһында фильм төшөрөргә ҡушһалар һәм уның сценарийын үҙегеҙ яҙһағыҙ, үҙегеҙ төп ролде башҡарһағыҙ һәм уны үҙегеҙ үк төшөрһәгеҙ, ул фильм ниндәйерәк булыр ине?**

**Алсын:** Бәләкәй саҡта балалар һәр ваҡыт бәхетлеләр, шуға ла бәхет тураһындағы фильмым балалар тураһында булыр ине.

**Айсель:** Мин дә балалар тураһында фильм эшләр инем, улар нисек уйнай, көлә. Берәү ҙә иламаҫ ине. Өлкәндәр ҙә ҡатнашыр ине унда.

**Салауат:** Мин Тимер кеше тураһында фильм төшөрөр инем, ул унда һуғышмаҫ ине, ә балаларҙы һаҡлап йөрөр ине. Һәр бер баланың бына шундай дуҫы булыр ине. Һөт эсергә яратҡан бәпестәр тураһында ла фильм эшләргә була инде, сөнки иң тыңлаусан балалар ғына һөт эсергә ярата.

**Зөлхизә:** Мин был турала уйлағаным юҡ. Йәнһүрәт төшөрөргәлер, бәлки? Йәнһүрәттәр ҡыҙығыраҡ та инде. Үҙем тураһында фильм төшөрөргә була, сөнки беҙ бит бик бәхетле.

**Салауат:** Фильмдың аҙағында "Бәхетеңә күҙ теймәһен", тип әйтеп ҡуяһың.

**▸ Рәхәт кенә яуланған бәхеттең ҡәҙере булмай, тиҙәр. Бәхетте аңлар өсөн был фильмда, моғайын да, насарлыҡ та булырға тейештер? Унда изгелек яуызлыҡты нисек еңеп сығыр ине?**

**Алсын:** Берәй этте яуыз итергәлер, бәлки? Бына бәпес уйнап ултыра икән, ти, уның эргәһендә бесәй ултыра. Ә эт килгән дә уның уйынсыҡтарын туҙҙырған, сөнки ул бит бесәйҙе яратмай, әллә, киреһенсә, бесәй этте яратмаймы шул. Әсәй күреп ҡала ла, этте ҡыуып ебәрә. Әсәй гел яҡшылыҡ ҡына эшләй, шуға ла ул яҡшы герой ғына була ала.

**Сыңғыҙ:** Изгелек бит яуызлыҡты һәр ваҡытта ла еңә, бөтөн йәнһүрәттәрҙә, фильмдарҙа шулай күрһәтәләр. Иң тәүҙә яуызлыҡ еңә, унан инде яҡшылыҡ.

**Алсын:** Алдашыу ҙа насар ҡылыҡ. Ике тапҡыр алдашыу бигерәк насар. Бер әкиәт беләм, унда бер көтөүсе гел алдашып йөрөй. Бер саҡ, көтөүҙе бүре баҫты, тип, ауылға йүгереп ҡайта. Икенсе тапҡыр ҙа шулай алдаша. Көтөүгә ысынлап та бүре килгәндә уға берәү ҙә ышанмай һәм ярҙам итмәй.

**Салауат:** Мәҡәлдәрҙә лә изгелек яуызлыҡты еңә, тип әйтелә.

**Зөлхизә:** Әкиәттәрҙә лә яҡшылыҡ еңә. "Ҡамыр батыр"ҙа, тағы ла башҡа әкиәттәрҙә лә. Мәскәй әбей бына насар, ул насарлыҡ эшләй балаларға. Бүре уҫал һәм насар. Фильмда уларҙы төшөрөргә була.

**Сыңғыҙ:** Ә яҡшы кешеләр барыбер күберәк!

**Салауат:** "Тамыр"ҙа ла яҡшылыҡ күберәк!

**▸ Белеүебеҙсә, бөгөн "Тамыр" студияһы балалары Салауат Юлаев майҙанында уйындар ойошторасаҡ, балаларҙы бейетәсәк, йырлатасаҡ. Әйтегеҙ әле, ни өсөн 1 июнь балаларҙы яҡлау көнө тип атала һәм балаларҙы нимәнән яҡларға кәрәк?**

**Айсель:** Нисек нимәнән яҡларға, алдаҡсыларҙан инде. Алдаҡсы - ул иң ҡурҡыныс кеше. Ул хатта бәләкәстәрҙе лә рәнйетә, алдай.

**Салауат:** Балалар урамға сыҡҡанда уларҙы гел яҡларға кәрәк, юғиһә, берәйһе урлап алып китһә? Бына мин хәҙер үҫтем, быйыл ике тапҡыр мәктәпкә бер үҙем барҙым.

**Алсын:** Бәлки, мин дөрөҫ уйламайымдыр, әммә атайҙар һәм әсәйҙәр балаларҙы гел яҡларға тейеш. Ниндәйҙер хәрби кешеләр түгел, ә беҙҙең яҡлаусыларыбыҙ булып улар тора һәм улар бар эште лә эшләй белә.

**Сыңғыҙ:** Дошмандарҙан, янғындан һаҡларға кәрәк балаларҙы. Ә илатырға бөтөнләй ярамай. Бына беҙҙең бәләкәй һеңлебеҙ Сәлимә тыңламай, ә илап, әйбер таптырырға белә. Ҡайһы саҡта ныҡ йәнде көйҙөрһә лә, уны яратып ҡына торабыҙ. Беҙ уны яҡларға тейешбеҙ.

**Салауат:** Күҙ тейҙеме икән ни илаҡ булғас? Өшкөрөп ҡарағыҙ. Мин ҡустым Рамаҙанды йәнһүрәт күрһәтеп әүрәтәм. Ҡыҙҙар илаҡ була, тиҙәр ҙә ул. Мәктәптә, киреһенсә, малайҙар күберәк илай.

**Алсын:** Беҙҙең мәктәптә лә ҡыҙҙар иламай, бына малайҙарҙың илағанын күргәнем бар. Бер сәбәпһеҙ түгел инде, берәй ере һыҙырылһа, ҡолаһалар - илайҙар. Беҙ Сәлимәне илатһаҡ, әсәй әйтә, һеҙ һеңлегеҙҙе яҡларға, ярҙам итергә тейешһегеҙ, ти. Мин әле быға төшөнөп етмәйем, шулай ҙа уйлауымса, ҙур кешеләрҙең балаларға әйткән һүҙҙәре дөрөҫ була.

**Зөлхизә:** Минең ҡустым ҡолаһа ғына илай. Мин уны ныҡ яратам, апай булғас, яҡлап ҡына йөрөтәм. Ул миңә, апай, ти. Мин уны Айтуған, тип йөрөтәм. Ә әсәйемә - әсәкәйем, атайыма атаҡайым, тием. Атайым миңә гел дә, аҡҡошом, ти.

**Салауат:** Балалар ни тиклем күп илаһа, әсәйҙәр шул тиклем тиҙерәк ҡартая. Минең әсәйҙең дә сәсе әҙерәк ағарҙы.

**Айсель:** Ысынмы? Бер тапҡыр Бөрйәндә ауылда сәй эсеп ултыра инек, олатай әйтә, ана өләсәң сәсемде вис ағартып бөттө, ул мине ҡартайтты, ти. Әллә шаяртты инде?

**▶ Шундай матур байрамда балаларға нимә теләр инегеҙ?**

**Салауат:** Тәүфиҡлы, иманлы булһындар - өлкәндәр шулай тип әйтергә ярата, был яҡшы теләктер, моғайын.

**Алсын:** Бәхетле, тыңлаусан булһындар, һәйбәт уҡыһындар, ҙур үҫкәс, үҙҙәренең балалары булһын. Улар һеҙҙе бер ҡасан да ҡайғыртмаһын.

**Сыңғыҙ:** Бәхетле булһындар һәм оҙаҡ йәшәһендәр.

**Айсель:** Һәр бер балаға көлмәйенсә ҡарап булмай, сөнки улар йәтеш кенә һәм көләс булалар. Гел көләп кенә тороғоҙ.

**Зөлхизә:** Әсәй-атайҙарығыҙҙы тыңлағыҙ.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Ғалимдар тарафынан күптән раҫланған был: бәхетле бала үҫкәс тә бәхетле буласаҡ. Беҙ, ололар, бала саҡ - ул ғүмерҙең иң бәхетле мәле, тибеҙ, был турала күп һөйләйбеҙ, быға барыһын да ышандырабыҙ, уны гел һағынып иҫкә алабыҙ, әммә ни өсөндөр үҙебеҙҙе көн һайын бәхетле тоймайбыҙ. Бәләкәй дуҫтарыбыҙҙың яуаптарын уҡығандан һуң, быының сәбәбенә төшөнгәнһегеҙҙер, ҡәҙерле уҡыусылар. Баҡтиһәң, бәхетле бала саҡта бәхет өсөн күп нәмә лә кәрәк түгел икән. Бала саҡтағы бәхетте тойоу һәләтен юғалта күрмәгеҙ һәм берүк әсәйҙәрегеҙҙең сәсе ағармаһын, бәләкәстәр!**

**Ләйсән ДАЯНОВА әңгәмәләште.**

*АФАРИН!*

# ҺУҢҒЫ ҠЫҢҒЫРАУ БАЙРАМЫ...



## Республика башҡорт лицей-интернатында





**Һуңғы ҡыңғырау тантаналары башлыса бер төрлө сценарий менән үтә республикабыҙҙа. Ә бына Республика башҡорт лицей-интернаты элекке сығарылыш уҡыусыларының "Үҫеш" фонды ярҙамы менән был байрамды башҡорт һабантуйы сценарийы буйынса үткәрҙе.**

Барыһы ла һабантуйҙағыса булды. Тантанала милли йолалар атҡарылды, милли һәм спорт уйындары уйнатылды, алдынғыларҙы һәм ветерандарҙы бүләкләргә лә онотманылар. "Тамыр" балалар студияһы тәрбиәләнеүселәре, "Арғымаҡ" рок төркөмө башлап ебәргән йыр-моң башҡалар дауамында сараның аҙағынаса яңғырап торҙо.

- Һабантуй бик матур ойошторолған. Кемдер шахмат уйнаны, кемдер физик көс талап иткән ярыштарҙа ҡатнашты. Беҙҙең лицейҙың бар эшмәкәрлеге сағылды ла инде һабантуйҙа: беҙҙә баш баҫып уҡып ҡына ултырмай лицейсылар, йәмәғәт эштәрендә лә ҡатнашалар, үҙҙәрен спорт, сәнғәт, төрлө техника өлкәһендә лә камиллаштыралар, - тине 9 синыф уҡыусыһы Алик Хилажев. Тап ошо егет үҙенең иптәштәре менән яңыраҡ Мәскәүҙә үткән робот техникаһы буйынса ярыштарҙа икенсе урын яулап ҡайтты. Улар әлеге мәлдә Индонезияның баш ҡалаһы Джакартала үтәсәк донъя чемпионатына әҙерләнәләр.

Һабантуйға уҡыу йортоноң элекке сығарылыш уҡыусылары ла күп килгәйне. Лицей шуның менән дә үҙенсәлекле: уны тамамлаусылар аҙаҡтан да уҡыу йорто менән бәйләнеште өҙмәй. Даими рәүештә лицейға ярҙам итәләр, тығыҙ бәйләнеш тоталар, уҡыу-уҡытыу процесында ҡатнашалар. "Был сара лицей өсөн генә түгел, баш ҡаланың башҡа уҡыу йорттары өсөн дә әһәмиәтлеләр, тип уйлайым. Сөнки һуңғы ҡыңғырау байрамы мәктәпте тамамлаусының хәтерендә оҙаҡҡараҡ ҡалһын өсөн, уны бик үҙенсәлекле итеп үткәрергә кәрәк. Бына был йәһәттән беҙ бер өлгө күрһәттек, буғай..."- ти "Үҫеш" фонды директоры Илсур Сөләймәнов.

"Беҙҙең лицейсыларҙың йөҙҙәрендә нур шәйләнеңме? - ти лицейҙың тәүге сығарылыш уҡыусыларының береһе. - Ә бит был ал-ял белмәй эшләгән уҡытыусы һәм тәрбиәселәребеҙ тырышлығы". Ысынлап та, лицейҙа тыуҙырылған мөхиттә әҙәпле, рухлы һәм ныҡышмалы рәүештә маҡсаттарына табан барған уҡыусылар тәрбиәләнә. РБЛИ-ны тамамлаған уҡыусы йәнәшенә бер ваҡытта ла ниндәйҙер боҙоҡлоҡ, яман ғәҙәттәрҙе ҡуйып булмай.

Эйе, күп ҡыйынлыҡтарға, шул иҫәптән лицейҙың үҙ бинаһы булмауға ҡарамаҫтан, Башҡортостандың иң алдынғы белем усаҡтарының береһе бына шулай оло уңыштары менән даими ҡыуандырып тора. Быйыл лицей уҡыусылары район, ҡала, республика, Рәсәй кимәлендә конкурс, олимпиада, интернет-олимпиада, фәнни-ғәмәли конференцияларҙа йөҙҙән ашыу призлы урын яулаған. Химия, информатика, башҡорт теле, әҙәбиәте һәм мәҙәниәте буйынса яулаған ҡаҙаныштар күп. Алты уҡыусы вуз олимпиадаларында еңеү яулап, мәктәпте тамамламаҫ элек юғары уҡыу йорттары студенттары булып киткән. Лицейҙы тамамлаясаҡ 59 уҡыусының унауһы миҙалға лайыҡ буласаҡ. Педагогтар коллективынан торған команданың "Киләсәк мәктәбе" тип аталған яңы быуын мәктәбе проектында финалға сығып, жюри тарафынан ҙур баһа алыуы ла күпте һөйләй.

**Азамат ӘБҮТАЛИПОВ.**

## ...Мостай Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһында



**Гимназия үҙенең ете йыллыҡ эш дәүерендә ярайһы уҡ уңыштарға өлгәшкән. Быйыл ул 49 уҡыусыны үҙ аллы тормош юлына аяҡ баҫтыра. Сығарылыш уҡыусылары араһында сит ил, Мәскәү, Санкт-Петербург юғары уҡыу йорттарына уҡырға инергә теләүселәр байтаҡ. 4 уҡыусы алтын һәм көмөш миҙалға дәғүә итә. Балаларҙың хыялы был юлы ла тормошҡа ашасаҡ, сөнки былтырғы сығарылыш уҡыусыларының да 97 проценты юғары уҡыу йорттары студенттары булып киткән.**

Гимназия директоры Гөлназ Әхмәҙиева белдереүенсә, Берҙәм дәүләт имтихандарының былтырғы һөҙөмтәләренә ҡарағанда, гимназия уҡыусылары химия һәм биология буйынса Киров районында иң юғары күрһәткестәргә өлгәшкән. Шулай уҡ математика, физика, йәмғиәтте өйрәнеү һәм рус теле фәндәре буйынса ла уңыштары һиҙелерлек. Төп предмет һаналған, аҙнаһына биш сәғәт уҡытылған башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрен уҡытыу ҙа юғары профессиональ кимәлдә ойошторолған.

Быйылғы сығарылыштың үҙ йондоҙо ла бар, ул - Хансура Дауатов. Хансураны күптәр йәш йырсы, "Шаяниум" конкурстарында билдәлек алған алдынғы уҡыусы булараҡ белә. Инглиз телендә иркен аралашҡан, сит ил делегациялары алдына әҙерлекһеҙ сығыш яһай алған, бейегән, йырлаған һәм мәктәптә тик бишлегә өлгәшкән егет менән хушлашҡылары ла килмәүе күренеп тора гимназия уҡытыусыларының. Ни тиһәң дә, "башҡорт гимназияһын тамамлаған егет" брендын күптәр ошо егеткә ҡарап күҙ алдына килтерә бында.

М. Кәрим исемендәге гимназия тағы шуныһы менән үҙенсәлекле: бында башҡорт телендә иркен аралашҡан балалар менән бергә, башҡорт телен белмәгән, әммә уны өйрәнергә теләге булған башҡа милләт балалары ла белем ала. Һуңғылары 11 йыл буйы, бөтә балалар кеүек үк, аҙнаһына биш сәғәтлек программа буйынса башҡорт теле һәм әҙәбиәтен өйрәнә, 9-сы һәм 11-се синыфтарҙы тамамлаған саҡта башҡорт теленән һәм башҡорт әҙәбиәтенән имтихан тапшыра. Гимназия асылғаны бирле бында уҡыған рус телле Андрей Туҡаев менән әңгәмәләшеүҙән шул беленде: Башҡортостанға улар ситтән күсеп килгән, бишенсе синыфҡа тиклем егеттең башҡорт телен бер тапҡыр ҙа ишеткәне булмаған. Хәҙер ул, башҡорт телен башланғыс кимәлдә беләм, тип иҫәпләй. "Гимназияла төрлө конкурстар үтеүе, Мәскәүҙән, сит илдәрҙән ҡунаҡтар йыш килеүе, уҡытыусыларҙың алсаҡлығы, ихласлығы һәм күпте белеүе оҡшай", - ти егет. Әйткәндәй, ул да, Хансура кеүек, инглиз телендә иркен аралаша. Киләсәктә Андрей Санкт-Петербург дәүләт университетының Халыҡ-ара бәйләнештәр факультетына уҡырға инергә теләй.

Балаларының бында уҡыуынан башҡорт ата-әсәләр генә түгел, башҡа милләт ата-әсәләр ҙә ҡәнәғәт. Быны беҙ башҡорт телендә үткән һуңғы ҡыңғырау байрамында ла тойҙоҡ. Тимәк, был гимназия тәжрибәһен өйрәнеү, башҡаларға өлгө итеп ҡуйыу бик урынлы булыр ине.

**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**

һиҙмәй ҙә ҡалды. - Бер һандыҡты тултыра яҙған. Ғүмер буйы йыйҙымы икән?

- Сәрбиямал, - тине апаһы шөбһәле тауыш менән. - Һылыу! Һин ул аҡсаларға теймәгәнһеңдер бит?

Ҡараңғыға күҙ өйрәнгәйне. Сәрбиямал апаһының күҙҙәренә тултырып ҡарап яуап бирҙе.

- Юҡ, апай.

Апаһы йылмайҙы. Уның аҡ тештәре емелдәне.

- Яҡшы! Аҡыллыһың шул! Мин Ләйсән апайға ҡалай ҙа рәхмәт кенә әйтәм. Аҡса алған һайын ебәреп торҙом, теләһә нимә эшләтһен. Һин иҫән-һау. Янымдаһың. Хаттарымды ғына бирмәй насар эшләгән. Уның ҡарауы, минең уға хәҙер бурысым юҡ.

Шул мәл Сәрбиямалдың "һандыҡтан аҡса ала алманым" тигән эсен ҡыҫып тотҡан үкенесе һыпырып алғандай юҡ булды. Үҙе лә һиҙмәстән, иркен тын алды.

- Беҙ аслыҡты, ауырлыҡты еңдек. Иҫәнбеҙ. Был шатлыҡ. Бының өсөн бер нәмә лә йәл түгел, - тине Сәрбиназ уның күсерештәрен аңлағандай, уйсан тауыш менән.

- Мин усыңдағы усаҡ булһам, ә һин, апай, йөрәктәге усаҡ булдың!

Иртән иртүк торҙолар, йәһәт кенә йыйындылар ҙа ата-бабалары төйәк иткән боронғо матур ауылдарына ҡайтты ла киттеләр. Шул ерҙә уларҙың атаһы киләсәккә өмөт бағып, йорт һалған. Әсәһе килен булып төшкән. Был ауыл тик уларҙыҡы ине, шуға ла тыуған төйәктә ата-әсәләренең эшен дауам итер, ырыу-заттарының данын ҙурлап, ҡәҙерләп йәшәр өсөн атлыҡты улар. Ике көн йәйәү атланылар. Тыуған райондарына етәрәк, ылау осраны. Күрше урыҫ ауылына инеп, белештәрендә йоҡланылар. Таң һарыһында күҙ тырнап астылар ҙа, йәнә юлға сыҡтылар.

Бына улар тау башында баҫып тора. Аҫта, туғайҙа - ауылдары. Үрҙән өйҙәр бәләкәс кенә күренә, тас апаһының муйынындағы мәрйендәр һымаҡ ҡына. Бер мәл ҡаршы яҡ тауҙан ҡояш йылмайҙы. Ул йылмайғас, ауыл да терелде, нурланды. Быны ике ҡыҙ ҙа тойҙо. Тойҙо ғына түгел, ә ап-асыҡ күрҙеләр. Күрҙе генә түгел, был мәлдә улар үҙҙәре лә нур ине. Олоһо кесеһенә йылмайҙы. Кесеһе - олоһона ҡарап. Шунан Сәрбиназ уң ҡулын алға һуҙҙы ла ашыҡмай ғына усын яҙҙы. "Ус төбөндәге усаҡ..." Ҡояштымы, ауылдымы усына һалды, әйтеүе ҡыйын, ләкин Сәрбиямал устың иң төбөндә үҙе ятҡанын асыҡ белә ине. Апайҙың ҡытыршы уң ҡулы алға йүнәлтелгән, усында тик үҙе генә күргән усаҡ... Сәрбиямал иһә ҡәҙерле кешеһенең һул ҡулын ҡуш ҡуллап эләктереп алды. Ныҡ итеп ҡыҫып тотто. Ныҡ итеп. Хәҙер Сәрбиямал бер нәмәне аҫыҡ белә - етәкләшкән ошо ҡулдарҙы бынан ары берәү ҙә инде айыра алмаясаҡ.

**(Аҙағы).**

*ЙӘШТӘР - ЙӘШТӘРСӘ*

# ЕҢӘМ, ТИҺӘҢ...

## сигенә лә бел



**Билбау көрәше менән фәҡәт таҫыллы һәм көслө ир-егеттәр шөғөлләнеүен күреп өйрәнгәнлектән, ошо көрәшсе ҡыҙ тураһында ишеткәс, күҙ алдына алпан-толпан баҫып йөрөгән дәү кәүҙәле спортсы һынланғайны. Етеҙ хәрәкәтле, енел кәүҙәле бәләкәй генә ҡыҙыҡай менән танышҡас, бер аҙ аптырабыраҡ та ҡуйылды. Әммә был билбау көрәше буйынса Башҡортостан чемпионы, Ауырғазы районы Толбазы башҡорт гимназияһының XI класс уҡыусыһы Ләйсән Сәғитова менән әңгәмәләшә башлағас, тәүге аптырауым юҡҡа сыҡты: ҡыҙыҡайҙың, ысынлап та, күбеһенсә спортсыларҙа ғына була торған көслө ихтыярын, еңеүселәргә хас тәүәккәллеген, маҡсатҡа ынтылышлығын күреп һоҡландым. Ҡыҙҙар өсөн барыбер ҙә бик ҡулай тойолмаған был спорт төрөнә үҙен нимә йәлеп итеүе, ярыш сәме, көрәш һәм, ғөмүмән, спорт менән шөғөлләнеүҙең кеше характерына йоғонтоһо хаҡында Башҡортостан йыйылма команда ағзаһы Ләйсәндең үҙен тыңлайыҡ, булмаһа.**

- Унынсы класҡа уҡырға Толбазыға килгәс, шунда уҡып йөрөгән ике ҡыҙ мине үҙҙәре менән спортзалға алып китте. Билбау көрәше буйынса секцияла шөғөлләнеүселәрҙең күнекмәһе бара ине ул көндө. Бер-береһенә бил бирмәстән алышып йөрөгән тиңдәштәремдә ҡарап тороп, миндә лә көрәшеп ҡарау теләге тыуҙы. Уйын күреп кенә тотонғайным, арбаны ла ҡуйҙы бит был спорт! Өҫтәүенә, тренер Ғәлим Миңлейәр улы Лоҡманов дәртләндереп, хуплап та ебәргәс, мин ныҡлы ҡарарға килдем: көрәшергә! Шулай башланды спорт менән шөғөлләнеү. Тренерыбыҙ тағы бер нисә ҡыҙҙы саҡырып килтереп, тәжрибә төркөмө булдырҙы. Һөҙөмтәлә ошо ҡыҙҙар араһынан ике республика чемпионы әҙерләне.

7-8 майҙа Өфөлә Еңеү көнөнә бағышланған Рәсәй турниры хаҡында ла телгә алып китәйем, сөнки 37 спортсы араһынан 3-сө урынға сығыу минең өсөн ҙур еңеү тип иҫәпләйем. Был турнирҙан һуң, май урталарында, Саҡмағошта үткән Башҡортостан беренселегендә беҙҙең гимназияның ҡыҙҙар командаһы ярайһы уңышлы сығыш яһаны. Был ярышта мин алышҡа өс мәртәбә сыҡтым. Тәүге алышта әхирәтем Гөлназ менән көс һынаштыҡ. Ул тәүҙә 2 балға өҫтөнлөк менән килде. "Ләйсән, һин еңәһең", тине миңә тренер. Уның һүҙҙәре көс биргәндәй булһа ла, көрәш - көрәш инде ул, һәр кем үҙенең нимәгә һәләтле икәнлеген күрһәтергә тейеш. Әхирәт, дуҫ, тип тороп булмай шул бында. Сәмләнеп китеп көрәштем һәм алыш минең файҙаға 5:2 менән тамамланды. Шунда сәм, сәмләнә белеү - көрәштә өҫтөнлөккә өлгәшергә булышлыҡ итеүсе шәп сифат икәнлегенә төшөндөм.

Икенсе алышта үҙемә таныш булмаған бер дәүҙеүе менән көрәштә лә миңә мотлаҡ еңергә кәрәк ине, сөнки фәҡәт шул осраҡта ғына Гөлназ әхирәтем икенсе урынға сығасаҡ. Иңемә төшкән икеләтә яуаплылыҡ алдында ҡаушабыраҡ та ҡалдым, буғай. Ҡыҙыҡайҙың көсө бар, техниканы ла белә, тик уны дөрөҫ файҙаланмай: килтерә лә аяҡҡа тибә был, ауырттырыу алымы менән мине ҡурҡытмаҡсы бөтөн ниәте. Шул саҡ сығырымдан сығыр хәлгә еткәндә лә тыныслыҡ һаҡлап, инициативаны үҙ ҡулыма алдым: һулаҡайҙан килтереп бәрҙем дә дәүҙеүсемде 2:0 менән еңдем. Ошонда мин махсус рәүештә асыуына тейеп, һарыуыңды ҡайнатҡан мәлдәрҙә лә агрессияға бирелмәйенсә, тыныс ҡала алыу баһаһын ныҡлап төшөндөм: еңеүсе булырға теләйһең һәм командалаш иптәштәрең мәнфәғәте һинең намыҫта икән, үҙеңде ҡулға ал, бер ниндәй провокацияға ла бирелмә!

Өсөнсө тапҡырына Дим ҡасабаһынан килгән кәүҙәгә бәләкәй генә, ләкин апаруҡ көслө ҡыҙыҡай менән осраштым. Билдән шаҡара тотоп, дөрөп алып бара был. Аяҡты терәп өлгөрә алмай ҡалдым: иғтибарһыҙлығым уға бер мәрәй булып, иҫәпте асып ебәрҙе. Минең һулдан бәреү алымын белә, бик һаҡ ҡылана. Шулай ҙа яйын тура килтереп, бәрҙем уны һулдан, миңә 2 балл яҙылды, уның ҡарауы, хәҙер үҙемә һаҡланыу сараһын күрергә кәрәк. Аяҡ салып йыҡҡайным үҙен, китте бит был үсегеп, ярһып. Дәүҙеүсемдең асыҡтан-асыҡ ярһыуынан, күрәләтә асыуынан төрлө алымдар ҡулланып һаҡланырға тура килде. Был спорт төрөндә һаҡлана белгән өсөн дә мәрәй яҙыла. Шулай итеп, ярһыу ҡыҙыҡайҙы 5:1 менән еңдем, ә ул көрәш майҙанынан билбауын атып бәреп сығып китте. Бына бит, спортта ҡайһы саҡ асыу һис тә ярҙамсы түгел, сигенә лә белергә кәрәк.

Тормошта ла, бәлки, шулайҙыр? Ни тиһәң дә, тормош - шул уҡ көрәш бит ул. Шуны ла әйтәйем: билбау көрәше менән шөғөлләнә башлағандан бирле үҙемдең холҡомда, тормошҡа ҡарашымда ыңғай үҙгәрештәр тоям. Алдан бер нисә аҙымыңды уйлап эшләргә, йыйнаҡлыҡҡа, сабырлыҡҡа, маҡсатыңа ынтылышлы булырға, яртылыҡта туҡтап, баҙап ҡалмаҫҡа өйрәтә беҙҙе көрәш.

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Ләйсәндең билбау көрәше менән шөғөлләнеүен ата-әсәһе лә хуплап, дәртләндереп тора, сөнки уның уңыштары - күҙ алдында. Ике йыл эсендә төрлө кимәлдәге 12 ярыштың бөтәһендә лә призлы урындар яулаған ул. Оло спортҡа юлын башлап ҡына торған йәш көрәшсе өсөн был бик тә өмөтлө күрһәткес. Әлеге көндә Ләйсән Берҙәм дәүләт имтихандары тапшыра. БР Эске эштәр министрлығының Өфө юридик институтына уҡырға инергә хыяллана. Уңыштар теләйбеҙ уға!**

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА** яҙып алды.

*ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ*

# ТӘБИҒӘТЕБЕҘҘЕ...

## тергеҙергә була әле

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән тоҡтолдорған, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



**Азат ҠОТЛӘХМӘТОВ, БДУ-ның экология кафедраһы доценты, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының экология комиссияһы рәйесе:**
Әгәр бөгөн миңә халҡыма өндәшергә мөмкинлек бирелһә, иң тәүҙә "Кешеләр, аңлығыҙға килегеҙ, тәбиғәтебеҙҙе тәләфләмәгеҙ!" тигән оран һалыр инем. Бөтөн беҙҙең еребеҙ, тупрағыбыҙ, һыуыбыҙ, һауабыҙ, урмандарыбыҙ шул тиклем бысратылған, хатта иң хозур, иң матур урындарыбыҙ ҙа кеше йәшәй алмаслыҡ үле ерҙәргә әйләнәселәргән. Мәҫәлән, Баймаҡ районындағы Семеновск алтын табыу фабрикаһы, "Өфөхимпром"ы, күрше Силәбе өлкәһенең Тыныс йылғаһы тирәһе, тейешле саралар күрелгән хәлдә лә, оҙаҡ йылдар үле ер булып ҡаласаҡ шул әле.

Тәбиғәтебеҙҙе тергеҙә алмай торған сикте үтмәгәнбеҙҙер шулай ҙа, тигән ышаныс бар. Иләмәгәр был сикте үтһәк инде, аръягына бер ниндәй ҡотҡарыу ысулдары ла ярҙам итмәйәсәк: алдынғы электрон приборҙар ҙа, йыһан караптары ла... Хатта алтын-көмөш, ынйы-гәүһәрҙәр ҙә, һандыҡ-һандыҡ хазиналар ҙа ҡотҡара алмаясаҡ был бәләнән. Ерем, тәбиғәтем, халҡым, тип, янған илһөйәр, фиҙаҡәр кешеләр ҙә һирәк бит бөгөн. Шул битарафлыҡ бөлдөрә лә инде беҙҙе.

Тәбиғәтте һаҡлау проблемаһы "етемһерәтелгән" проблема булыуҙан ҡасан туҡтар? Ә бит илдә, шулай уҡ республикабыҙҙа ла, иҡтисадты үҫтереүгә нисек иғтибар бүленһә, экологияны һаҡлауға ла шундай уҡ мөнәсәбәт булырға тейеш. Был мәсьәләләрҙе хәл итеү юлдарын маҡсатҡа ярашлы рәүештә, йәлап ҡына эҙләп, аныҡ эштәр эшләгәндә, тәбиғәтебеҙҙең бысраныуына кәртә ҡуйырға була, тип уйлайбыҙ. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты янында ойошторолған экология комиссияһы ағзалары ла үҙ алдына шундай аныҡ маҡсаттар ҡуя һәм аныҡ мәсьәләләрҙе хәл итеүҙең юлдарын тәҡдим итә. Мәҫәлән, эре ҡалаларыбыҙҙы автомобилдәрҙән сыҡҡан 200-ҙән ашыу ағыулы матдәле төтөндән арындырыу өсөн транспорт сараларын зәңгәр яғыулыҡҡа күсереү эшен йәнләндерергә булыр ине. Тик быныӊ өсөн тәү сиратта эре ҡалаларҙа зәңгәр яғыулыҡ станцияларын арттырыу талап ителә. Юғиһә, әлегә Өфөлә лә ундай станциялар бармаҡ менән һанарлыҡ. Автомобилселәр бензиндан зәңгәр яғыулыҡҡа күсер ҙә ине, тик быға заправкаларҙағы сираттар ныҡ ҡамасаулай. Ә бит зәңгәр яғыулыҡ, бензиндан айырмалы рәүештә, эшкәртелгән килеш углекислый газ һәм һыу ғына бүлеп сығарыуы менән зыянһыҙ булып тора. Бензинға ҡарағанда осһоҙораҡ та.

Комиссиябыҙ алдына ошондай ҙур мәсьәләләрҙе хәл итеүҙә ҡатнашыу бурысын да ҡуйбыҙ. Килеп сығырмы эш? Әлбиттә! Беҙ күп осраҡта йырып сығып булмаҫтай булып күренгән мәсьәләләр алдында баҙап ҡалабыҙ. Теләк булһа, хәл итеүҙе көткән бөтә мәсьәләләрҙе лә урынынан ҡуҙғатырға була, тип уйлайым.

✓ *Форум һәм уның сиктәрендә үткәрелгән акциялар йәштәрҙе эскелек, наркоманлыҡ кеүек социаль сирҙәр менән бергә, экстремистик төркөмдәргә барып эләгеүҙән дә ҡурсалауҙы, ошо хаҡта иҫкәртеүҙе маҡсат итеп ҡуйҙы.*



*ИНТЕРНЕТТАН*



# ЙӨҘ МАТУРЛЫҒЫ... 

## һаулыҡ билдәһеме?

■ Голландия ғалимдары асыҡлауынса, стресс гормоны - кортизол кимәлен сәстәргә анализ үткәреп белергә мөмкин. Белгестәр әйтеүенсә, сәстәр кеше сәләмәтлеге тураһында мөһим мәғлүмәт сығанағы булып тора. Организмдағы кортизол кимәлен ябай ҡан анализынан түгел, сәстәрҙән анализ алып тикшереү яҡшыраҡ. Стресс гормоны юғары булыуы йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәре барлыҡҡа килеү хәфеүен дә бермә-бер арттыра. Тикшеренеүселәр өс ай дауамында өс йөҙҙән ашыу оло йәштәге кешенең сәс өлгөләрен сағыштырып, кортизол үҙгәреүе картинаһын төҙөгән. Йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәре, инсульт, диабет, периферик артериялар ауырыуҙары менән яфаланыусыларҙа стресс гормоны күрһәткесе күпкә юғарыраҡ булған. Ғалимдар билдәреүенсә, сәстәрҙә мәғлүмәт оҙағыраҡ һаҡлана, шуға ла был ысул ауырыу үҫеше хәүефен аныҡ билдәләргә мөмкинлек бирә.

■ Кивиҙа лимонға һәм әфлисунға ҡарағанда С витамины күберәк. Әммә бының менән уның файҙалы яҡтары бөтмәй әле. Табиптар раҫлауынса, был тропик емеше яҡшы кәйеф булдырыусы ла. Киви ашау организмда бәхет гормоны - эндорфин бүленеп сығыуға булышлыҡ итә, ул кешенең эмоциональ хәлен яҡшырта, ҡан баҫымын яйға һала, шулай уҡ бөйөрҙәр һәм аш һеңдереү эшмәкәрлегенә яҡшы йоғонто яһай.  Ә был факторҙар барыһы ла ғүмерҙе оҙайта. Мәҫәлән, диетологтар иҫәпләп сығарыуынса, 1 килограмм киви ғүмерҙе яҡынса 1 айға оҙайта. Барыһы ла был емештә файҙалы матдәләрҙең (органик кислоталар, магний, фосфор, калий, тимер һ.б.) максималь күләмдә булыуында. Бынан тыш, киви емешен косметик сара итеп ҡулланырға була, сөнки ул тирене таҙарта, коллаген бүленеп сығыуға булышлыҡ итә, ә ул үҙ сиратында һырҙар барлыҡҡа килеүҙән һаҡлай.

■ Төҫкә матур ир-егеттәргә һалҡын тейеп бармай, әммә был яңылыҡ сибәр ҡатын-ҡыҙҙарға ҡағылмай, тип раҫлай ғалимдар. Daily Mail яҙыуынса, тышҡы күркәмлек менән көслө иммун системаһы араһында бәйләнеш бар. Күптән түгел үткәрелгән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, ирҙәрҙең йөҙ матурлығы иммун системаһының ныҡлығы тураһында һөйләй, имеш. Ғалимдар 52 йәш ҡатын-ҡыҙға гепатиттан прививка яһай һәм барлыҡҡа килгән антиесемдәр һанын үлсәй. Улар шулай уҡ кортизол күләмен дә аныҡлай. Һуңынан Турку университеты ғалимы Маркус Рантала етәкселегендәге тикшеренеүселәр был ҡатын-ҡыҙҙарҙың фотоһын студенттарға күрһәтеп, уларҙың матурлығын баһаларға ҡуша. "Ир-егеттәр һөҙөмтәләренән айырмалы рәүештә, ҡатын-ҡыҙҙарҙың иммун реакцияһы, йәғни антиесемдәр эшләп сығарыу һәләтлеге йөҙ сибәрлеге менән бәйле түгел", - ти Рантала. Ә кортизол кимәле шуны күрһәткән, ҡатын-ҡыҙҙар ҙа, ир-егеттәр ҙә стресс хәлендә күпкә йәмһеҙерәк күренә икән, тиелә мәҡәләлә.

■ Голландия тикшеренеүселәре фекеренсә, Интернет шаяртыу һәләтенә кире йоғонто яһай. Кешеләр яйлап шаяртыу һәләтен юғалта, тип раҫлай Левена университетының социология уҡытыусыһы, профессор Йохан Верберкмоес. "Яҡшы итеп һөйләнгән көләмәс ваҡыт һәм үҙенсәлекле мөнәсәбәт талап итә, уны һөйләүсе кеше уға үҙенән дә нимәлер өҫтәп, уны яңыса балҡытып ебәрә. Зирәклек беҙҙең мәҙәниәттән юҡҡа сығып бара, кешеләр яйлап әңгәмәләшеп ултырыуҙы хәҙер кәрәк, тип тапмай", - ти ғалим.

*ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ*

**Күгәрсен районының Үрге Биҡҡужа ауылындағы "Юлбарыҫ" ял итеү үҙәгендә Башҡортостан мосолман йәштәренең "Ислам. Йәштәр. Киләсәк" тип аталған икенсе форумы үтте. Республиканың төрлө ауыл-ҡалаларынан, дини уҡыу йорттарынан йыйылған йәштәр ике көн дауамында бер-береһе менән танышты, аралашты, көнүҙәк проблемаларға ҡағылған семинарҙарҙа, дәрестәрҙә ҡатнашты, волейболда, футболда, грепплингта көс һынашты, ислам дине белеме буйынса фекер алышты, үҙ белемдәрен арттырҙы. Кисен башҡорт эстрадаһы йондоҙҙары - ҡурайсы Роберт Юлдашевтың "Ҡурайсы" төркөмө, Илгиз Абдрахманов, Тимур Вәлитов һәм башҡа артистар ҡатнашлығындағы концертты тамаша ҡылды.  Юғары кимәлдәге ҡунаҡтар килеүе сараға тағы ла мәртәбә өҫтәне. Йәштәр алдында республика Президенты Рөстәм Хәмитов, РФ Дәүләт Думаһы, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары, Президент хакимиәте вәкилдәре, йәмәғәт ойошмалары етәкселәре, дин әһелдәре телмәр тотто.**

# МОСОЛМАН ЙӘШТӘРЕ...

## хаҡ юлда йөрөһөн, тип



Дингә ҡайтыу йылдам тиҙлек алһа ла, был күренеш менән риза булмағандар ҙа табыла тора. Эшмәкәрлектәре шик тыуҙырған бәғзе бер стратегик ғилми институттар ваҡыты-ваҡыты менән сәйер генә хеҙмәттәр яҙып баҫтырып, ғауға күтәреп ала. Ошо көндәрҙә генә шундай институттарҙың береһе үҙ докладында Төньяҡ Кавказ республикалары менән бергә Татарстан һәм Башҡортостанды ла милли һәм дини экстремизм йоғонтоһо юғары булған төбәктәр исемлегенә индереп ҡуйҙы. Республика етәкселеге, эксперттар докладты инҡар итеп сығыш яһаны ла инде.

Икенсе яҡтан, республикаға дини экстремизм ҡурҡынысы бөтөнләй янамай, тип әйтеү ҙә дөрөҫ булмаҫ. Ислам байрағы аҫтына йәшенеп, халыҡ араһында низағ тыуҙырып, донъя бутап йөрөгән кешеләр беҙҙә лә килеп сыҡҡылай. Уларҙың дини белеме булмаған йәштәрҙе үҙ рәттәренә ылыҡтырыу осраҡтары тураһында ишетеп-күреп торабыҙ. Шуға ла булып үткән форум һәм уның сиктәрендә үткәрелгән акциялар йәштәрҙе эскелек, наркоманлыҡ кеүек социаль сирҙәр менән бергә, экстремистик төркөмдәргә барып эләгеүҙән дә ҡурсалауҙы, ошо хаҡта иҫкәртеүҙе маҡсат итеп ҡуйҙы.

Форумда йәштәргә мәҙхәбтәр нескәлектәре һәм уларға эйәреү зарурлығын аңлатҡан, исламдағы социаль ярҙам институты - хәйриәлек хаҡында дәрестәр үткәрелде. Ислам мәғрифәте, блогерҙар эше буйынса секциялар эшләне. "Радикал исламдың йәштәр араһында таралыуы" секцияһы йәштәрҙә айырыуса ҡыҙыҡһыныу тыуҙырҙы. Бының сәбәптәре аңлашыла. Йыш ҡына диндән алыҫ булған кешеләрҙә йәки икенсе дин вәкилдәрендә бар мосолмандар ҙа радикал булып күренә. Был милләт-ара һәм дини-ара диалогты ҡатмарлаштыра. Ә экстремистик йүнәлештәге кешеләргә, киреһенсә, үҙ ҡараштарын туйындырыу өсөн аҙыҡ булып хеҙмәт итә.  Дини китаптарҙы тыйыу, яулыҡ ябынған ҡыҙҙарҙы уҡыу йорттарына индермәү - ошо уҡ өлкәнән.

БР Президенты хакимиәтенән Азат Фәттәхов экстремизмға хоҡуҡи күҙлектән баһа бирҙе, мәсет йә булмаһа дини ойошма асырға йыйыныусыларҙы юридик нескәлектәрҙе лә онотмаҫҡа саҡырҙы. Хоҡуҡтарҙы законлы рәүештә яҡлар өсөн мосолмандар араһында көслө юристар ҙа булырға тейешлеген билдәләне. Рәсәйҙә дин дәүләттән айырылған, әммә теләк булғанда, шәхси дини мәктәп асыу мөмкинлеге лә бар, тине Азат Марат улы. Миҫалға йәһүд мәктәптәрен килтерҙе.

Дини яҡтан белемле булһалар ҙа, Рәсәйҙә, донъяла барған ваҡиғалар хаҡында өҫтән-мөҫтән генә белгән мосолман йәштәре лә бар. Улар араһында шәхси ризаһыҙлыҡтарын дөйөмләштереп, бар мосолмандар ризаһыҙлығы итеп күрһәтергә тырышыусылар ҙа табыла. Ошондайҙарҙы күҙҙә тотоп, Башҡортостан Diniә назаратынан Руслан Саяхов кешенең дәүләттә барған ҡайһы бер күренештәр менән ризаһыҙлығы, асыулы булыуы ҡәҙимге күренеш, тине. Ләкин ауыр хәлдән сығыу һәм етешһеҙлекте төҙәтеү өсөн иң яҡшы юлдарҙы, уңайлы ысулдарҙы һайлап эш итергә кәрәк. Ҡайҙа ла зирәклек зарур һәм оло быуын менән кәңәшләшеүҙе, уларҙың нәсихәттәренә ҡолаҡ һалыуҙы инҡар итергә, онотorға ярамай, тип тамамланы һүҙен Руслан хәҙрәт.

Рәсәй мосолмандарының Үҙәк Diniә назараты мөфтөйө Тәлғәт Тажетдиндың төшкө намаҙҙан һуң йәштәргә мөрәжәғәт итеүе был сараның бер һығымтаһы булараҡ ҡабул ителде: "Бер хәҙисендә Бәйғәмбәребеҙ, Аллаһы Тәғәлә донъя мәшәҡәттәрен ҡалдырып, Раббыһын хәтерләп намаҙға баҫҡан йәш кешегә мөхәббәт менән ҡарай һәм барлыҡ фәрештәләренән дә шуны талап итә, тип әйтә, - тине ул. -  Олоғайғас, ҡайҙа барырға белмәй мәсеттәргә килгән кешеләр ҙә етерлек. Ләкин меңәрләгән тормош ләззәттәрен, шайтан тоҙаҡтарын, төнгө клубтарҙы һәм кафеларҙы ҡалдырып, көсҡеүәтен Раббыһы юлында хеҙмәт итеүгә йүнәлткән егет-ҡыҙҙар ниндәй күркәм! Беҙ әлеге ваҡытта ислам дошмандары тарафынан бүлгеләнәбеҙ, низағлашабыҙ. Һеҙҙең быуынға дөйөм мәсьәләләрҙе уртаға һалып, бергәләп хәл итергә, исламды бер байраҡ аҫтында йыйырға насип булһын. Һәм бөгөнгө сара ошо берләшеүгә ҙур өмөттәр һала".

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Айнур АРЫҪЛАНОВ, Башҡортостан Diniә назаратының йәштәр бүлеге рәйесе:** Республика мосолман йәштәренең форумы икенсе йыл үткәрелә. Быйыл беҙҙең башланғысты Рәсәй мосолмандарының Үҙәк Diniә назараты, БДПУ, Рәсәй ислам университеты ла күтәреп алды. Сараға республика етәкселеге тарафынан ҙур иғтибар бүленеүе лә ҡыуандыра. Үткән йылда форумда күп маҡсаттар ҡуйылды. Шуларҙың береһе "Ислам - экстремизмға ҡаршы" девизы аҫтында акция үткәреү ине. Акция сиктәрендә беҙ республиканың ҡала-райондары буйлап йөрөнөк, йәштәр менән аралаштыҡ, аңлатыу эштәре алып барҙыҡ. Эйе, диндәге күп егеттәребеҙгә үҙ-үҙенә бикләнеп йәшәү хас. Беҙгә, мосолмандарға, ислам тәғлимәтен өйрәнеү менән бергә, дини булмаған ойошмалар, кешеләр менән дә аралашыу мөһим. Бәйғәмбәребеҙ бикләнеп өйөндә генә ултырһа, ислам тураһында бер кем дә белмәҫ ине. Ул кешеләр менән аралашып йәшәгән, аңлатҡан, төҙәткән. Беҙгә лә халыҡҡа сығырға кәрәк.

**Рөстәм ХӘЙРУЛЛИН, БДПУ хеҙмәткәре:** Эш форум менән генә тамамланмай. Бында күтәрелгән мәсьәләләр, ҡуйылған маҡсаттар киләсәктә мотлаҡ үтәлергә тейеш. Форумда орлоҡ һалына, уның ниндәй шытым бирере артабан нисек туйындырылыуынан, йәғни башҡарылған эштәрҙән тора. Мин үҙем блогерлыҡ буйынса семинарҙа ҡатнаштым. Интернет мөхиттә мәғлүмәттең күп һәм төрлө булыуы йыш ҡына башты бутай. Тауҙай мәғлүмәт араһынан нимә хәҡиҡәт, нимә ялған икәнен аңлауы ла еңел эш түгел. Ә был бик мөһим. Әлеге ваҡытта ислам порталы өҫтөндә эш алып барабыҙ. Унда дингә ҡағылышлы мәҡәләләр, программалар ҡуйыласаҡ.

**Азамат САЛАУАТОВ.**

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ЗАРЛАНМА, ЙӘМЕ...



**Аҡса етмәүгә, шул сәбәпле кәрәкле әйбер ала алмауға зарланыуҙарҙы йыш ишетергә мөмкин. Ҡайһы берәүҙәрҙең бар ғүмере ошо зарҙарҙа үтә. Ғәҙәттә, быңдай кешеләр матди йәһәттән, шәхси планда уңышлыраҡ булғандарға ҡара янып көнләшә, уларҙы ҡәһәрләй, күрә алмай. Шуның менән бар тормоштарын рухи тамуҡҡа әйләндерә.**

Зарланма. Диуарҙары күккә ашҡан, түбәләре һәм иҙәндәре ҡиммәтле таштарҙан түшәлгән йорттарың булмауына көймә. Мәғрур йорттарҙы төҙөүгә бар ғүмерен сарыф итеп тә, уларҙа йәшәргә яҙмаған кешеләрҙең ғүмере һинә һабаҡ булманымы? Ай һайын машина алған күршеңә ҡарап та күңелең кителмәһен. Матур аяҡ кейеме хаҡында хыялланғандар ҙа бар донъяла. Ресторанда ашай алмауың ҙур юғалтыу итеп иҫәпләүселәр ҙә етерлек. Сүплектә яткан икмәк киҫәген алып ашарҙай булып асығып йөрөмәүеңә шөкөр ит.

Байлыҡ кешенең хеҙмәт емеше, Аллаһы Тәғәлә уны Үҙе теләгән һәм ошо юлда көс һалған һәр кемгә бирә. Ләкин күптәрҙең байлыҡҡа нәфсеһе сикһеҙгә әүерелә. Шуға ла, ни тиклем етеш йәшәмәһендәр, улар ҡәнәғәтлек, ризалыҡ тойғоһо кисермәй. Хәҙистә әйтелгәнсә, ике алтынлы дала хужаһы өсөнсө далаға ашҡына... Нәфсе бер ҡасан да туймағанлыҡтан, ошо ҡылыҡтары менән ундайҙар үҙҙәрен һәләкәткә килтерә, күңел упҡынына осора.

Кешегә бирелгән ниғмәттәрҙең сиге юҡ. Әгәр ошо һүҙҙәрҙе уҡый алаһың икән, һинең шул ниғмәттәрҙе эҙләрлек зиһенең бар. Йөрәгең ошонда яҙылғандарҙы ҡабул итә һәм ҡәлбеңдә үҙеңдән бай, етеш, уңышлы булғандарға ҡара көнсөллөк юҡ икән, һинә алтын һарайҙарҙың кәрәге лә юҡ. Бары менән риза бул. Ләкин быны ҡул ҡаушырып, эшһеҙ ултырыу, тип аңлама, эшлекһеҙлек инсанды биҙәмәй. Әҙәм балаһы ергә ғибәҙәт өсөн ебәрелгән. Ғибәҙәтте ғибәҙәтханаларға бикләнеп, донъя мәшәҡәттәренән ҡасып ваҡыт үткәреү, тип аңлау дөрөҫ түгел. Аллаһы Тәғәләне йөрәктән сығармайынса һәм уның алдындағы бурыстарыбыҙҙы онотмайынса, Раббыбыҙ биргән ниғмәттәрҙе хәләл юлдар менән табып, файҙалы маҡсаттарҙа ҡулланып, ошоноң өсөн шөкөр итеү - ғибәҙәт ул. Ә шулай ҙа, күп тырышлыҡ һалып, күп эшләп тә байлыҡҡа өлгәшә алманың икән, тимәк, был да хәйерлегәлер. Аҡса төҫө күреү менән генә кеше сүрәтен юғалтҡан ҡарундар хәле уйлангандарға фәһем булырға тейеш.

Туғандарыңдың, яҡындарыңдың, таныштарыңдың кеҫәләре ҡалынайыуы һине тағы ла ныҒыраҡ ярһытамы? Көнсөлөккә, күрәлмаусанлыҡҡа, дошманлыҡҡа килтерәме? Аллаһтың матди ниғмәте янында булғандарға бүленеп биреүенә ҡырын ҡарауыңды нисек аңлатып була һуң? Әгәр ул кеше байлыҡты бер кем хаҡына инмәйенсә, урлашмайынса, таламайынса тапһа, ҡупыраймай, үҙе, ғаиләһе, йәмғиәт өсөн изге эштәрҙә, изге башланғыстарҙа ҡулланһа, тәкәбберләнмәһә, шөкөр итһә - һис шикһеҙ, һин камиллыҡҡа юл тотҡан инсан туғаныһың, дуҫыһың, танышыһың, Ер һәм Күктәрҙең Хужаһының муллығы шаһитыһың. Әгәр был кеше ундай түгел икән... Аллаһы Тәғәлә "Залимдар ҡылған эштәрҙән Алла битараф икән тип иҫәпләмә, Ул уларға яҙаны ҡараштар ҡатып ҡалған көнгә тиклем кисектерә", тип әйтә.

Изге Ҡөрьән һәм һуңғы шәриғәт менән ебәрелгән Бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт (салаллаһу ғәләйһи вә сәлләм) бер хәҙисендә: "Дин эштәрендә үҙегеҙҙән юғары (тәҡүәлерәк, ихласыраҡ, әҙәплерәк, дин талаптарын урынына еткереп башҡарыусы) булғандарға ҡарағыҙ һәм уларға эйәрегеҙ, ә донъя эштәрендә үҙегеҙҙән түбән (фәҡирерәк, мохтажыраҡ, ғәрип, сирле) булғандарға ҡарағыҙ һәм Аллаһы Тәғәлә һеҙгә ниғмәттәрҙе күберәк биргәне өсөн шөкөр итегеҙ", ти. Әҙәм балалары Бәйғәмбәребеҙ нәсихәтенә ҡолаҡ һалһа, осоҙ-ҡырыйһыҙ ризаһыҙлыҡ тотҡонлоғонан ысҡыныр, камиллашыу юлында ғүмерен үткәрә башлар ине. Тик... Эйе, диндә беҙҙең йәшәйешебеҙгә ҡағылышлы бар һорауҙарға ла яуаптар бар, ләкин улар көндәлек тормошобоҙҙа файҙа килтерһен өсөн исламдың йәшәү рәүешебеҙгә әйләнеүе зарур.

**Мораҙым АЙСЫУАҠОВ.**

ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ



# УН АЛТЫ ЙӘШЛЕК ҠАРТЛАС

## Крия-йога: төп мәлдәре

Крия-йога тәғлимәте тәүҙә Һиндостанда киң таралыу ала, һуңыраҡ тотош донъяға тарала. Көнбайыш донъяһына ғилем "Йога автобиографияһы" китабының авторы Парамаханса Йоганананданың миссионерлыҡ эшмәкәрлеге һөҙөмтәһендә үтеп инә. Санскритта "крия" "эшләргә", "эш итергә" тигәндә аңлата. Крия-йога - билдәле ғәмәлдәр һөҙөмтәһендә кешенең Сикһеҙлек йәки Хаҡ Тәғәлә менән берләшеүенә булышлыҡ итеүсе ысул. Күнекмәләрҙе башҡарыу һөҙөмтәһендә кешенең ҡаны углекислотанан ҡотолоп, кислородҡа байый. Кеше организмындағы артыҡ кислород йәшәү тоғына әйләнә. Был мейенең һәм арҡа мейеһе үҙәктәренең йәшәреүенә килтерә. Венанан ағыусы ҡандың барлыҡҡа килеүен тотҡарлап, кеше тукымаларҙың тарҡалыуын туктатырға йәки кәметергә һәләтле.

Крия-йога - боронғо ғилем. Боронғо аҡыл эйәләре йыһан аныңың сере тын алыуға хакимлыҡ итеү менән тығыҙ бәйләнгән булыуын аса. Был Һиндостандың донъяуи белем байлығына үҙенсәлекле һәм үлемһеҙ өлөшө. Ғәҙәттә, тәндең йәшәүен тәьмин итеү менән мәшғүл йәшәү көсө тын алыуҙы тынысландырыу һәм туктатыу ысулы аша эшмәкәрлектең юғарыраҡ төрҙәре хаҡына азат ителергә тейеш. Крия-йога менән шөғөлләнә башлаусы уйында ғына йәшәү энергияһын чакра тип аталған арҡа мейеһе үҙәге тирәләй әскәаҫҡа ебәрә. Энергияның арҡа мейеһе тирәләй әйләнеүе кеше эволюцияһында нескә прогресс барлыҡҡа килтерә. Ярты минутлыҡ крия бер йыл рухи үҫешкә тиң.

Крия-йоганың хаталаныуға илткән һәм дилетанттар тарафынан уҡытылған ғилми булмаған тын алыу күнекмәләре менән бер ниндәй ҙә уртаҡлығы юҡ. Тынды үпкәләрҙә көсләп тотоу тәбиғи түгел һәм был хатта сәләмәтлек өсөн зыянлы ла. Йәндә тәнгә бәйләп тороусы тын алыу ебен сисеп, крия-йога ғүмерҙе оҙайтыуға һәм аңды сикһеҙ киңәйтеүгә хеҙмәт итә. Был ысул материяға бәйле булған аҡыл менән хистәр араһындағы ныҡышмал көрәште еңеп сыға, кешене Мәңгелекте мираҫ итеп алыу өсөн азат итә. Крия-йога - дин түгел, ул әлеге ваҡыттағы бер генә дини ғилем менән дә низағҡа инмәй. Уны барлыҡ конфессия вәкилдәре лә ҡуллана ала, сөнки бер кемдән дә инаныуынан баш тартыуҙы талап итмәй: уның өсөн "дөрөҫ" һәм "дөрөҫ булмаған" ғилем юҡ. Был ғәмәл бары тик беҙҙең эпохаға, миллион йылдарға һуҙылған яй эволюция өсөн ваҡыт ҡалмаған заманда мотлаҡ. Ер бөйөк һынауҙар алдында тора һәм бары тик аң йәһәтенән артта ҡалғандар ғына оло һәләкәт яҡынлашыуын тоймай.

**Самат МӨХӘМӘТЙӘНОВ,**
**философия фәндәре докторы.**

УҢЫШ ҠАҘАН

# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## Уңыштың һәм камиллыҡтың 200 төп сере

155. Үҙегеҙҙең эш урынында новатор булығыҙ. Алдағы аҙна дауамында етәксегеҙгә башҡарған эшегеҙҙе һәм эш сифатын дөйөм яҡшыртыу тураһында ун һөйләм әйтегеҙ. Һеҙҙе яңы бурыстар алырға яраҡтан һәм уларҙы үтәүгә энергия, энтузиазм менән тотонған яңы идеяларҙың генераторы итеп белһендәр.

156. Үҙегеҙҙән көләргә өйрәнегеҙ.

157. Мейегеҙҙең барлыҡ тәҙрәләрен дә асыҡ тотоғоҙ.

158. Бер генә тулы көн булһа ла "мин" тип әйтмәйенсә йәшәп ҡарағыҙ. Иғтибарығыҙҙы башҡаларға йүнәлтегеҙ. Башҡаларҙың нимә һөйләгәнен тыңлағыҙ һәм үҙегеҙ өсөн бик күп ҡыҙыҡлы һәм файҙалы яңылыҡ асырһығыҙ, яңы дуҫтар табырһығыҙ.

159. Көнөнә бер сәғәтегеҙҙе генә булһа ла тура мөрәжәғәттәргә генә яуап биреп, өндәшмәй шым үткәрегеҙ. Үҙегеҙгә төбәлгән һорауҙарға яуап биргәндә лә һөйләшеүҙе артабан оҙон-оҙаҡҡа һуҙмағыҙ. Беҙ билдәле нәмәләр хаҡында бик йыш һөйләйбеҙ, әммә шул уҡ нәмәләрҙе даими ҡабатлап торабыҙ. Ошо боронғо Көнсығыш күнекмәһе ихтыяр көсөн генә туплап ҡалмай, телмәр телмәрең аныҡлығын һәм асыҡлығын тәьмин итә. Был һөҙөмтәле аралашыуҙы үҫтереү өсөн бик мөһим.

160. Көн һайын үҙегеҙҙе күнелегеҙ ятмаған ике эште башҡарырға мәжбүр итегеҙ. Ул көн һайын иртәгәгә тип ҡалдырылған отчет яҙыу йәки ботинкаларҙы таҙартыу ҙа булыуы мөмкин. Бурыстың әһәмиәтһеҙ булыуы түгел, уны башҡарыу мөһим! Тиҙҙән был эштәр һеҙгә ул тиклем үк күңелгә ятмаҫтай булып тойолмаҫ, ә эш һөҙөмтәлегегеҙ һиҙелерлек артыр. Үҙегеҙҙе мәжбүр итегеҙ - был характерҙы сыныҡтырыуҙың боронғо ысулы.

161. Ысын бәхет бер нәмәгә генә бәйле: теләһә ниндәй маҡсатына өлгәшеү. Шәхес булараҡ үҫешкән ваҡытта ғына һеҙ ысынлап та бәхетле була алаһығыҙ. Хыялығыҙ артынан алға барыуығыҙҙы тойһағыҙ, үҙегеҙҙә тыйып тотҡоһоҙ энергия һәм тормош көсө барлыҡҡа килеүен һиҙерһегеҙ. Бер ни тиклем көсөргәнештән арыныу биргән, әммә бер ниндәй файҙаһы булмаған эшкә сарыф ителгән ваҡыт (телевизор алдында ултырыу - иң сағыу миҫал) - мәңгелеккә кире ҡайтарыу мөмкин булмаған ваҡытты юғалтыу ул. Көсөргәнештән арыныу һәм ял кәрәкле, мөһим мәл, әммә ял иткәндә лә үҙеңде камиллаштырыу йүнәлешендә барырға мөмкин. Бәхет әүҙем эшмәкәрлек ваҡытында килә, ә дан өҫтөндә йөкө һимерткәндә түгел.

162. Француз императоры Наполеон III үҙе ҡасандыр осрашҡан кешеләрҙең исемдәрен хәтерендә ҡалдырыу сифатына эйә булған. Уның сере - яңы кеше менән таныштырғанда: "Ғәфү итегеҙ, исемегеҙҙе ишетмәй ҡалдым", - тигән һорауҙа. Кеше исемен ҡабатлап әйттереү уны хәтергә һеңдереүгә булышлыҡ иткән. Әгәр кешенең исем-фамилияһы хәтерҙә ҡалдырыу өсөн ауыр икән, ул уларҙы хәрефләп әйтеүҙе һораған.

163. Боронғо Ҡытайҙың аҡыл эйәләре үҙ философияларын меңәр йылдар буйы эшләгән: үҙҙәрендә илтифатлыҡ һәм холоҡ бөтөнлөгө менән бер рәттән, ярһыу рух үҫтергәндәр. Үҙеңдә ошо өс сифатты тәрбиәләү һеҙҙе барыһы ла ихтирам иткән көслө шәхескә әүерелдерәсәк. Барлыҡ көсөгөҙҙө туплап, ошо сифаттарығыҙҙы үҫтереү өсөн үҙегеҙгә йогонтоғоҙҙо файҙаланығыҙ.

**Робин ШАРМА.**

ИҒТИБАР!

# "ЫРЫУҘАР ТАШЫ" ҺӘЙКӘЛЕН...

## ил менән төҙөйөк

**2010 йылдың йәйендә, III Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайына әҙерлек барышында, Ишембай районы территорияһындағы Торатау итәгендә "Ырыуҙар ташы" тип аталасаҡ тарихи-мемориаль комплекс төҙөү тураһында ҡарар ҡабул ителеп, уға символик нигеҙ ташы ла һалынғайны. Был һәйкәлдең үҙәген тәшкил иткән ҙур гранит ташҡа 40-тан ашыу оло һәм бәләкәй башҡорт ырыуҙары атамалары яҙылып ҡуйылырға тейеш ине.**



Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, билдәле сәбәптәр арҡаһында ошо этнографик комплексты төҙөү әлегә тиклем тотҡарланып торҙо. Шулай ҙа Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты етәкселеге тырышлығы менән ошо грандиоз һәйкәл комплексының проекты ижади төркөм тарафынан яңынан ҡаралып, уны дәүләт экспертизаһы ла хупланы.

Этнографик музейҙы һәм мәсетте үҙ эсенә алған мемориаль комплексты төҙөү байтаҡ финанс сығымдар талап итә. Яңыраҡ уҙғарылған Әйле ырыуы йыйыны делегаттары ошо һәйкәл өсөн бергәләшеп иғәнә йыйырға саҡырып, башҡа башҡорт ырыуҙары вәкилдәренә мөрәжәғәт итте. Ҡоролтайыбыҙҙың Башҡарма комитеты Советы ошо башланғысты хуплап, төбәк, ҡала һәм район башҡорттары ҡоролтайҙарына һәйкәл өсөн аҡса йыйыу буйынса махсус мөрәжәғәт ебәрҙе.

"Ырыуҙар ташы" мемориаль комплексы - уникаль халыҡ һәйкәле буласаҡ. Әлегә тиклем Рәсәйҙә тотош халыҡҡа бағышланған һәйкәл һалынғаны булманы. Нисек кенә ауыр булмаһын, беҙ ошо проектты ғәмәлгә ашырырға бурыслыбыҙ. Был - бөтөн халыҡ эше. Тап шуның өсөн барса милләттәштәребеҙҙе ошо изге эшкә үҙ өлөшөн индерергә саҡырабыҙ. Эш иғәнә итеп бирелгән аҡса күләмендә түгел - хәленә ҡарап, быны һәр кем үҙе хәл итер. Әммә халҡыбыҙҙың "Изгелек ерҙә ятып ҡалмаҫ", тигәнен онотмайыҡ. Торатауҙа башҡорт ырыуҙары һәйкәле ҡалҡһа, рухыбыҙ нығыр, бәҫебеҙ күтәрелер, данлы тарихыбыҙ бар донъяла танылыр.

БДБҠ Башҡарма комитеты иғәнәләрҙе туплау өсөн махсус банк счеты асты. Һәр кем үҙ иғәнәһен банк аша үҙаллы ебәрә ала. Башҡарма комитет Советы йыйылған аҡсаның маҡсатҡа ярашлы файҙаланыуын контролдә тотасаҡ.

**Иғәнәләр ебәреү өсөн реквизиттар:**

Получатель:
**МСОО "Всемирный курултай (конгресс) башкир"**
Расчетный счет
**40703810400000000229**
ИНН **0274095117**
Банк получателя:
**ОАО АКБ "Башкомснаббанк"**
БИК **048073842**
к/с **30101810800000000842**

ӘЙТКӘНДӘЙ...

## ТАУЫШ БИРӘЙЕК

**Рус география йәмғиәте һәм Бөтә Рәсәй дәүләт телерадиотапшырыуҙар компанияһы "Комсомольская правда" гәзите ярҙамында "Рәсәй 10" мультимедия проектын тормошҡа ашыра.**

Махсус булдырылған сайтта Рәсәйҙең 700-ҙән ашыу тәбиғәт, мәҙәниәт, археология, фәнни-техник прогресс ҡомартҡыһының фотоһүрәттәре урынлаштырылған. Интернет менән ҡулланыусыларға бөгөнгө Рәсәйҙе символлаштырған 10 иҫтәлекле урынды һайлап алырға тәҡдим ителә. Еңеүсе тип табылған объекттарҙың миниатюралары Мәскәү янында урынлашасаҡ "Рәсәй" ландшафт паркында тәҡдим ителәсәк.

Тауыш биреүгә Башҡортостандан Шихандар, "Шүлгәнташ" мәмерйәһе, "Ләлә-Тюлпан" мәсете, Янғантау, Красноусол минераль сығанаҡтары, Ирәмәл тауы, Солоҡсолоҡ, "Ирәндек айыуы" тип аталған алтын самородок тәҡдим ителә. Әле Волга буйы федераль округы буйынса тауыш биреүҙә **Шихандар** - икенсе, **Салауат Юлаев һәйкәле** өсөнсө урында килә.

**"Рәсәй10" сайтында тауыш биреү (http://10russia.ru) 29 сентябргә тиклем дауам итәсәк. Үҙебеҙҙең объекттар өсөн тауыш бирәйек.**

**21-се һандағы сканворд яуаптары: Горизонталь буйынса:** Кавалерия. Криптография. Байраҡ. Айран. Бабай. Алабуға. Раунд. Әйтемсәк. Ғауға. Китапхана. Ҡәләм. Әлгәнйәк. Хур. Тана. Оят. Диктатор. Индикатор. Иңкеш. Аэродром. Кәтүк. Һуҡа. Брутто. Ләпәкәй. Алатыр. Йоҡосо. Трактор. Әмер. Алйырҙан. Олпат. Бамбук. Лирика. Куртка. Ахыр.

**Вертикаль буйынса:** Хажи. Астероид. Тауыҡ. Тактик. Бәхет. Һоло. Азот. Күбә. Бағана. Решка. Әҙәплелек. Күпер. Йорат. Ҡайраҡ. Арго. Бала. Айыу. Ҡарсыға. Маҙа. Референдум. Ауыҙ. Нәрәтә. Дайса. Нектар. Кишер. Енәйәт. Одесса. Аспид. Йорт. Рөхсәт. Күкрәк. Мендәр.

ИҒЛАН

**Заказ буйынса БУРА һатыла:**
3x5, 6x6, 6x8, 8x9, 9x10, 8x10.
**Таҡталар:**
50x200, 50x150, 50x100, 25x200, 25x150, 25x100, 30x150.
**Телефондар: 8 (34792) 77-9-28, 8-903-312-75-31, 8-906-100-40-80**

## *КОТЛАЙБЫҘ!*

Май айында тыуған көндәрен билдәләгән уҡыусыларыбыҙҙы - **Дүртөйлө ҡалаһынан** Лилиә Шәйәхмәтова, **Дүртөйлө районы** Таймырҙа ауылынан Миләүшә Байрамшина, Мәскәү ауылынан Зилә Князева, **Яңауыл ҡалаһынан** Гөлсәсәк Фахрова, **Яңауыл районы** Максимовка ауылынан Рәмил Даутов, **Благовар районы** Языково ауылынан Светлана Кәлимуллина, Ағарҙы ауылынан Ғәлиә Ғәйнуллина, **Бишбүләк районы** Дим ауылынан Раушания Тиканова, **Бүздәк районы** Ҡыҫҡайылға ауылынан Илүзә Ғәтийәтова, Кәпәй-Ҡыбау ауылынан Айгөл Авзалитдинова, Ташлыкүл ауылынан Альмина Батыргәрәева, **Ауырғазы районы** Үрге Ләкәнде ауылынан Илнар Йәғәфәров, Мөхтәр Йәғәфәров, **Өфө ҡалаһынан** Фәрзәнә Вәлиева, **Туймазы ҡалаһынан** Гәүһәр Фәйзуллина, **Туймазы районы** Түбәнге Троицкий ауылынан Алһыу Хаматханова, **Миәкә районы** Миәкәбаш ауылынан Зөлфиә Хәкимова, **Ғафури районы** Ҡауарҙы ауылынан Әлфиә Хәмзина, **Красноусол ҡасабаһынан** Эльвера Ҡунафина, **Мәләүез ҡалаһынан** Шакир Ураҙбаев, **Федоровка районы** Бала Сытырман ауылынан Рәйсә Сәлишева, Гүзәл Зәлилова, Федоровка ауылынан Айрат Йәнбирҙин, **Өфө районы** Дорогино ауылынан Аза Низаметдинова, **Баймаҡ районы** Ишбирҙе ауылынан Фәриғә Әлекбаева, Ярат ауылынан Гүзәл Монасипова, Мәһикамал Иҫәндәүләтова, Клара Юлғотлина, **Благовещен ҡалаһынан** Альбина Ғасипйәнова, **Салауат районы** Янғантау ауылынан Алия Ишбулдина һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ һәм рух ныҡлығы, тән сәләмәтлеге, бәхетшатлыҡтар, эшегеҙҙә уңыштар теләйбеҙ.

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

КӨН ТЕМАҺЫ

# ИМТИХАНДАР...

## шатландыра ла, көйәләндерә лә

**Рәсәй мәктәптәрендә һуңғы ҡыңғырау сыңдары тынып та өлгөрмәне, сығарылыш синыф уҡыусылары Берҙәм дәүләт имтихандары тапшыра башланы. Мәғлүмәттәр буйынса, БДИ-ны быйыл барлығы 860 мең кеше тапшырасаҡ, шуларҙың 750 меңе - 2013 йылғы сығарылыш уҡыусылары булһа, 110 меңе - ниндәйҙер сәбәптәр арҡаһында былтыр имтихан бирә алмағандар. Башҡортостанда 25742 кеше (шул иҫәптән уҙған йылдар сығарылыш уҡыусылары) БДИ тапшырасаҡ.**

Берҙәм дәүләт имтихандарының төп тулҡыны 27 майҙан алып 19 июнгә тиклем ваҡытты үҙ эсенә ала. Имтихан тапшырыу өсөн резерв көндәр (15-19 июнь) һәм өҫтәмә көндәр (8-15 июль) булдырылған. Мотлаҡ булған урыҫ теле һәм математиканан тыш, БДИ биреүселәрҙең күбеһе, йылдағыса, һайлап алыу буйынса тапшырылған имтихан итеп йәмғиәтте өйрәнеү фәнен һайлаған (500 меңдән ашыу). 220 меңдән ашыу уҡыусы - физиканан, 190 меңе тирәһе тарих фәненән БДИ тапшырасаҡ. Шулай уҡ уҡыусылар араһында биология (180 мең тирәһе), химия (110 меңдән ашыу) һәм инглиз теле (90 меңдән ашыу) лә популяр. Ә немец, француз һәм испан телен һайлаусылар иң аҙы.

Республикала ла ошо уҡ фәндәр тәүге урындарҙа, йәғни йәмғиәтте өйрәнеү фәненән - 14976, физиканан - 9850, биологиянан - 6822, тарихтан - 5692 һәм химиянан 5330 кеше БДИ һорауҙарына яуаптар бирәсәк. Ни бары 12 генә кеше француз теленән имтихан тотоуҙы хуп күргән. Ә 37 кеше иһә бары тик урыҫ теле һәм математиканан ғына БДИ тапшырасағын белдергән. Был, үҙ сиратында, уларҙың юғары уҡыу йорттарына барырға иҫәп тотмауҙары хаҡында һөйләй. Өфө ҡалаһында БДИ тапшырыусыларҙың иң күбе Октябрь һәм Орджоникидзе райондарында, ә иң әҙе Дим биҫтәһендә теркәлгән.

Был аҙнала уҡыусылар урыҫ теленән тәүге имтиханды тапшырҙы. 30 майҙа информатика һәм мәғлүмәти-коммуникацион технологиялар, биология, тарихтан һынау тоттолар. Имтихандар тағы ла 3 июндә (математика), 6 июндә (сит телдәр һәм физика), 10 июндә (йәмғиәтте өйрәнеү һәм химия), 13 июндә (география һәм әҙәбиәт) тапшырыласаҡ. Быйыл Берҙәм дәүләт имтиханы тапшырыуҙа ҡайһы бер үҙгәрештәр бар. Мәҫәлән, ҡайһылыр фәндән имтихан тапшырыу ваҡыты оҙайтылһа, икенселәр өсөн, киреһенсә, ҡыҫҡартылды. Урыҫ теленән имтихан биреү ваҡыты 180 минуттан 210 минутҡа ҡәҙәр оҙайтылды, ә математика, физика, әҙәбиәт, информатика һәм МКТ-нан имтихан һорауҙарына яуап биреү өсөн уҡыусыларға 5 минутҡа әҙерәк ваҡыт биреләсәк, йәғни алдағы йылдарҙа ул 240 минут тәшкил итһә, быйыл 235 минутҡа ҡалдырылған. Ә тарих, йәмғиәтте өйрәнеү, биология, география, химия һәм сит телдәр фәненән имтихан тапшырыусылар өсөн ваҡыт шул уҡ ҡалған, йәғни тәүге икәүһенә - 210 минут, ә ҡалғандарына 180 минут бирелгән. Шулай уҡ быйыл бөтә предметтар буйынса ла алдан минималь мәрәйҙәр һаны билдәләнгән. Урта белем тураһындағы аттестатты алыу өсөн урыҫ теленән кәмендә 36, математиканан 24, йәмғиәтте өйрәнеү фәненән 39, физика, химия һәм биологиянан 36, тарих һәм әҙәбиәттән 32, информатика һәм МКТ-нан 40, географиянан 37 һәм сит телдәрҙән 20 балл йыйыу мотлаҡ.

Имтихан эштәрен тикшереү ваҡыты ла ҡәтғи ҡуйылған. Федераль кимәлдә билдәләнеүенсә, урыҫ теле һәм математиканан эштәр - алты, һайлап алынған предмет буйынса - дүрт, резерв һәм өҫтәмә көндәрҙә тапшырылғандар өс көн эсендә мотлаҡ тикшерелергә һәм уҡыусыларға һөҙөмтәләр хаҡында мәғлүмәттәр еткерелергә тейеш.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**БДИ тирәләй йыл да ниндәй ҙә булһа тауыш сыға. Быйылғы тәүге имтихан да ҡағиҙәнән ситләшмәне: теләгәндәр урыҫ теленән һорауҙарҙы имтихандан алда уҡ интернет селтәрендә ҡарай ала ине. Рәсәй Хөкүмәте Премьер-министры Дмитрий Медведев БДИ-ны ойоштороусылар алдына бындай хәлдәргә юл ҡуймаҫҡа, тигән ҡәтғи талап ҡуйҙы. Имтихан ваҡытында күсереү өсөн төрлө ҡулайламалар ҡулланған һәм имтихан яуаптарын интернетҡа урынлаштырғандарҙың эше ғәмәлдән сығарыласаҡ һәм, тәбиғи, улар быйыл ҡулдарына аттестат алыу бәхетенән мәхрүм ҡаласаҡ.**

**Гөлназ САФУАНОВА әҙерләне.**

✓ *Аҡыллылар янына барһаң, аңғыраны эйәртмә.*
*(Башҡорт халыҡ мәҡәле).*



СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

# ТӨП ТЕАТРЫБЫҘ...

## фестивалдәрҙә һынау тота

**М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрының 93-сө иҗад миҙгеле яңы спектакль премьераһы менән ябыласаҡ. БР-ҙың халыҡ яҙыусыһы Талха Ғиниәтуллиндың әҫәрҙәре буйынса эшләнгән "Ер менән күк араһында" (режиссеры Гөлдәр Ильясова) спектакленең жанры өндәге күрәҙәлек тип билдәләнгән. Был турала журналистар менән осрашыуҙа театрҙың художество етәксеһе Олег Закир улы Ханов белдерҙе.**

Төп герой - Ильяс исемле һалдаттың йәнен алырға килгән Ғәзраил, әгәр ҙә ерҙә йәшәү хоҡуғын һайлаһа, киләсәктә уны ниндәй яҙмыш көтөүен һүрәтләп бирә. Ғазаптар, ярлылыҡ, әрнеүҙәр, түбәнһетелеү - ниндәй тормошта йәшәйәсәген күреп, һалдат үҙенең ҡарарын белдерә. "Ер менән күк араһында" спектаклен тамашасы миҙгелдә ябыу сараһында - 14 июндә күрә аласаҡ. Ролдәрҙә - Фирғәт Ғарипов, Гүзәл Маликова, Шәүрә Дилмөхәмәтова, Әхәт Хөсәйенов, Илдар Ғүмәров, Илфат Булатов, Айһылыу Йомағолова, Фирҙәүес Ғиззәтуллина, Ринат Баймырҙин, Руслан Ғәлимов, Эмиль Әмиров.

Әммә уға тиклем театр бер нисә мәртәбәле фестивалгә барып ҡайтасаҡ. Әлеге мәлдә театр артистары Ырымбур ҡалаһында үткән V "Гостиный двор" Халыҡ-ара театр фестивалендә "Эдип батша" (режиссеры - Искәндәр Сакаев) спектакле менән ҡатнаша. Фестиваль Ырымбур театрҙары майҙанында 1994 йылдан бирле үткәрелә. Европа һәм Азияның милли һәм төрлө жанрҙа эшләүсе театрҙарын берләштереүсе байрам рәүешендә ойошторолған был сарала быйыл Мәскәү, Һамар, Дондағы Ростов театрҙары ла үҙ эштәрен тәҡдим итәсәк.

2 июндә театр Херсон ҡалаһында (Украина) үткән "Мельпомена Таврия" Халыҡ-ара фестиваленән ҡайтасаҡ. Унда Рәсәй, Белорус, Румыния, Португалия, Латвия, Литва, Грузия, Венгрия, Израиль, Франция театрҙары 31 спектакль күрһәтә. Башҡорт дәүләт академия драма театры унда Андрус Кивиряхктың "Әлифбанан бер себеш" (режиссеры - Линас Зайкаускас) монодрамаһы менән сығыш яһай.

Театр Ҡазан ҡалаһында үткән "Науруз" Халыҡ-ара төрки телле театрҙар фестивалендә Мостай Кәрим трагедияһы буйынса ҡуйылған "Ай тотолған төндә" (режиссеры - Айрат Абушахманов) спектаклен тәҡдим итә. Ун беренсе тапҡыр уҙғарылған был фестиваль программаһына Рәсәйҙең төрки телле республикаларынан тыш, Төркиә, Әзербайжан, Ҡырғыҙстан, Төркмәнстан, Ҡаҙағстан һәм башҡа илдәр театрҙары сығышы индерелгән. Башҡорт театры 7 июнь көндө сығыш яһаясаҡ.

Миҙгел ябылғанға тиклем артистар бәләкәй тамашасылар өсөн спектаклдәр уйнаясаҡ. 10 июнь 11.00 һәм 12.15 сәғәттәрҙә - "Буратино", 11 июнь 10.30, 12.00 сәғәттәрҙә - "Маугли", 13 июндә 11.00 сәғәттә - "Һөнәрсе менән өйрәнсек", 17 июнь 11.00 сәғәттә "Ҡар батшабикәһе" әкиәттәре тәҡдим ителәсәк.



# "БЕРҘӘМЛЕК" ҠУНАҠТАРЫ...

## Ишембайҙа, Ғафуриҙа, Өфөлә

**"Берҙәмлек" Халыҡ-ара фестивале Башҡортостан еренә Латвия, Польша, Ангола, Һиндостан, Ҡытай, Ҡаҙағстан, Тажикстан, Ҡырғыҙстан һәм Төньяҡ Осетиянан ҡунаҡтар йыя.**

РФ Мәҙәниәт министрлығы, Рәсәй дәүләт халыҡ ижады йорто, БР Мәҙәниәт министрлығы, Республика халыҡ ижады йорто, Ғафури, Ишембай муниципаль райондары, Салауат, Күмертау, Өфө ҡала округтары хакимиәттәре тарафынан ойошторолған был сара быйыл 7 июндән 12 июнгә тиклем дауам итәсәк. Ҡунаҡтар Ишембай ҡалаһында тантаналы парадта ҡатнаша һәм район һабантуйында сығыш яһаясаҡ. Ғафури районы һабантуйында ҡатнашып, фестиваль ҡунаҡтары 10 июндә Салауат ҡалаһына юлланасаҡ һәм "Юрматы ере" мемориаль комплексы менән танышасаҡ. 11 июндә иһә ҡунаҡтар Күмертау ҡалаһында сығыш яһаясаҡ.

"Берҙәмлек" халыҡ-ара фестивале 12 июндә Өфө ҡалаһында, Ленин майҙанында Гала-концерт һәм Ағиҙел йылғаһы буйлап "Арыҫлан Мөбәрәков" теплоходында экскурсия менән тамамланасаҡ.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АҠЫЛЛЫ ИР...

## ҡатынын яманламаҫ

Аҡыллылар янына барһаң, аңғыраны эйәртмә.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Дуҫтар - ваҡытыңдың ҡараҡтары бит ул.

**(Фрэнсис Бэкон).**

Бөйөк кешеләр бәләкәй генәлә лә хатта бөйөк була ала.

**(Маркиз де Вовенарг).**

Бар енәйәттәрҙе лә закон үҙе тыуҙыра.

**(Максимилиан Волошин).**

Кешене асыуландырыу һәм улар күңелендә яуыз уйҙар тыуҙырыуҙың бер ысулы - уны оҙаҡ көтөргә мәжбүр итеү. Был осраҡта көттөрөүсе үҙен ысынлап та әхлаҡһыҙ итеп күрһәтә.

**(Фридрих Ницше).**

Әгәр ҙә был тойғоно тәүге тапҡыр кисерәһең икән, уның ысын мөхәббәтме, түгелме икәнен тикшереүе бик ҡатмарлы.

**(Зигмунд Фрейд).**

Күҙ алдына килтереүе лә ҡыйын: әҙәби геройҙар менән тулы дәүләттә йәшәгән кешеләр менән ни булыр ине икән?

**(Джозеф Аддисон).**

Кеше бар эште лә булдыра ала, әгәр, булдыра алам, тип уйлаһа.

**(Пулий Марон).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Борон заманда бер батша оло һарай һалдырған. Унда миллион көҙгө эленеп торған. Бөтә диуарҙары, иҙәне, түбәһе - барыһы ла тик көҙгөнән булған. Бер саҡ һарайға бер эт йүгереп барып ингән. Әйләнә-тирәһендә үҙе һымаҡ үк әллә күпме эттәрҙе күреп, ҡаушап ҡалған. Тәүҙә эт үҙен яҡлау һәм башҡа эттәрҙе ҡурҡытыу өсөн, тештәрен ыржайтып, ырылдап ҡына торған. Уға яуап итеп башҡа эттәр ҙә ырылдаған. Эт өрөп ҡуйған икән, башҡалар ҙа өргән. Хәҙер инде эт үҙенең ғүмере ҡурҡыныс аҫтында булыуын ныҡлап тойған һәм ярһып өрөргә тотонған. Уның менән бергә башҡа эттәр ҙә ярһыған...**

**Иртән был этте үле килеш тапҡандар. Һарайҙа ул берҙән-бер эт булған, ә көҙгөләрҙә миллион үле эт һындары сағылған. Шулай итеп, был эт үҙ күләгәһе, үҙенең көҙгөләге сағылышы менән көрәшеп, һәләк булған...**

**...Әгәр ҙә үҙебеҙҙең күңелебеҙҙә ҡаршылыҡ юҡ икән, ул ҡаршылыҡ тормошта ла юҡ. Әгәр ҙә һин үҙ-үҙеңә ҡамасауламайһың икән, тимәк, тормошта ла һиңә ҡамасаулаусы бер ни ҙә юҡ. Тормош ҡануны шундай. Донъя - оло бер көҙгө, донъя -көҙгөләге бер сағылыш ҡына...".**

ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ

# САЛҒЫ ТАПАП АЛАЙЫҠ,

## Үҫ ҡанғанса сабайыҡ...

**Тәмәкесе кәбән** - янып, түбәһенән боҫо-төтөнө сығып ултырған кәбәндә шаяртып шулай атайҙар.

**Кәбән тоҙлау** - бесән дымҡыл булып, кәбән янмаһын өсөн уны тоҙлап ҡуялар.

**Көҙбайлыҡ** - ҡыш етеп ҡар яҡтанға тиклем, йәғни көҙ малға ашата торған бесән. Көҙбайлыҡ бесән мөләндә үк ауылға ташып ҡуйыла.

**Ҡырҡынсы күбә** - беҙҙең ауылда "Утыҙ туғыҙ күбәнән кәбән ҡойҙом, ҡырындыһы менән ҡырҡ күбә булды", тиҙәр. "Ҡырҡынсы күбә", тимәк, күбәләрҙе кәбәнгә ташлап бөткәндән һуң түҙрап ятып ҡалған ҡырынды бесән була инде.

**Таған һәу** - ҡырҙағы кухняның иң төп атрибуты. Өс әләштән тора: ике ҡаҙыҡ һәм аш һауытын элеп ҡуя торған арҡыры ашҡаяҡ.

**Ҡаҙыҡ ҡағыу** - ҡаҙыҡ өс яҡтан осланып, ергә ҡағылып ҡуйыла, ос яғында ашҡаяҡты эләктерер өсөн ике-өс асалы ботаҡ ҡалдырыла. Ботаҡтар аҫлы-өҫлө булһа, тағы ла шәберәк. Сөнки, әйтәйек, усаҡҡа ҡуйылған аш ҡайнап сыҡҡандан һуң, ашҡаяҡты өҫкәрәк күтәреп, ҡайнауын һүрәнләтергә була. Хәс тә газды бороп, утты кәметкән һымаҡ була инде.

**Шөңкәйтмә** - ваҡытлыса таған. Тағандан айырмалы рәүештә, бер генә ҡаҙыҡты 45 градус ауышлыҡта ергә ҡағып ҡуялар һәм осона аш бешереү йә сәй ҡайнатыу һауытын эләләр. Ғәҙәттә ҡыуыштан алыҫҡараҡ китеп бесән эшләгәндә шөңкәйтмә яһала. Һуҙ, ахыры, иңкәйтмә тигәндән килеп сыҡҡандыр.

**Салыр** - һарна ҡаҙып ала торған махсус көрәк. Ул ағас ботағынан яһала. Ботаҡтың бөләк йыуанлығындағы йыуан осо көрәк һымаҡ ослана, аяҡ менән баҫып ҡаҙыр өсөн бәләкәй ботаҡтың осо ҡалдырыла.

**Тәлге** - һарнанан бешерелгән бутҡа. Бының өсөн һарнаның тырнаҡтарын таҙартып йыуалар, тураҡлайҙар һәм аҙ ғына һыу һәм май һалып, талғын утта бешерәләр.

**Ер йөнө** - Белорет районының Абҙаҡ ауылында бесәнде шулай тип атайҙар.

**Әмир ҒҮМӘРОВ.**

**(Аҙағы. Башы 20-21-се һандарҙа).**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәррирәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Баш мөхәррир урынбаҫары** 246-03-24
**Бухгалтерия** 246-03-23
**Хәбәрселәр** 252-39-99
Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 31 май 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.
«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**
Тиражы - 5505
Заказ 2068